✓ ***Маҡсатҡа өлгәшеүегеҙҙе, хыялға артылыуҙы баш менән түгел, йөрәк менән теләгеҙ. Шул уҡ ваҡытта “хәүефһеҙлек ҡайышын” эләктерергә лә онотмағыҙ, сөнки теләктәр ғәмәлгә ашҡанда, тормошоғоҙ бик тиҙ бейеклек яулай башлаясаҡ. Аҡыл теләктәрҙе, хыялдарҙы тотҡарларға мөмкин, тойғолар - уларға осош биреүсе.***

***Робин ШАРМА.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

26 ДЕКАБРЬ - 1 ҒИНУАР (АҠЪЮЛАЙ - ҺЫУЫҒАЙ) 2009 ЙЫЛ

№52 (366)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Самауырынды ҡайнат та...**
күршеңде сәйгә саҡыр



2

**Ҡыштың һыуыҡлығын...**
ҡарабаш турғайға ҡарап бел



6

**Беҙ - Юлбарыҫ нәҫеленән,**
Арыҫландың затынан...



8-9

**Тәмләп ҡарау өсөн түгел,**
һәр көн тукланыу өсөн беҙҙең ризыҡ



13

**ТВ программа**

14

ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ

## Яңы йыл менән!

**Бөтөн Башҡортостан халҡын яҡынлашып килгән Яңы йыл менән Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ҡотланы. Үҙенең ҡотлауында Мортаза Ғөбәйҙулла улы үтеп барған йылды ниндәй ҡаҙаныштар, уңыштар менән тамамлауыбыҙ, яңы йылға ниндәй өмөттәр бағлауыбыҙ тураһында билдәләп үтте.**

"Уҙып барыусы йыл һуңғы ун йыллыҡта иң ҡатмарлыһы, иҡтисади һәм социаль өлкәнең, Башҡортостан халҡының ныҡлығына һынау йылы булды. Ләкин ниндәй генә ҡыйынлыҡтар килтерһә лә, уны хаҡлы рәүештә ижади йыл тип әйтергә мөмкин. Көрсөккә ҡаршы күрелгән саралар, иҡтисад өлкәһендә үткәрелгән структур үҙгәрештәр донъя көрсөгөнөң кире йоғонтоһон күп йәһәттән йомшартыуға булышлыҡ итте. Башҡортостан көрсөккә ҡаршы программаны иң уңышлы тормошҡа ашырыусы Рәсәй төбәктәре иҫәбенә инде", - тине Мортаза Ғөбәйҙулла улы.

Иң мөһиме, әлбиттә, республикала йәшәүсе халыҡтарҙың йәшәү кимәлен яҡшыртыу буйынса эшләнгән эштәр. Мортаза Ғөбәйҙулла улы был хаҡта ла әйтте: "Башҡортостаныбыҙҙа торлаҡ төҙөлөшө күләмен арттырыуға өлгәшеү һөҙөмтәһендә меңәрләгән ғаилә үҙенең торлаҡ шарттарын яҡшыртты. Аҙ ҡатлы йорттар төҙөлөшө әүҙем үҫеш алды. Яңы мәктәптәр, балалар баҡсалары, поликлиникалар һәм дауаханалар, спорт һәм мәҙәни учреждениелар төҙөлдө. Тиҫтәләрсә километр автомобиль юлдары, газ үткәргес һәм һыу торбалары селтәре һалынды. Ветерандарға, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренә, күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә, етем балаларға һәм йәштәргә ярҙам буйынса өҫтәмә саралар ҡабул ителде. Ошо йылдан биш һәм унан күберәк балиғ булмаған йәштәге балалы ғаиләләргә торлаҡ сертификаты бирелә башланы. Йәштәр башланғыстарын яҡлау һәм үҫтереү йылы программаһы уңышлы үтәлде. Һәм бөтә ошо ҙур эштәрҙең һөҙөмтәһе булараҡ, һуңғы 16 йыл эсендә тәүге тапҡыр тыуым кимәле үлем кимәлен уҙып китте. Былар бөтәһе лә Башҡортостан халҡының иртәгәге көнгә ышаныс менән ҡарауы, үҙҙәренең балалары, киләсәге өсөн тыныс булыуы күрһәткесе".

"Бөгөн беҙҙең төп бурыс - кризистан сығыуҙы лайыҡлы тәьмин итеү, халыҡтың тормош именлеген нығытыу, социаль-иҡтисади өлкәнең артабан да ныҡлы үҫеше өсөн нигеҙ булдырыу, - тине Президентыбыҙ Яңы йылға бурыстар билдәләп, өмөт бағлап. - Яңы йыл үҙе менән, һис һүҙһеҙ, шатлыҡтар ҙа, ауырлыҡтар ҙа алып киләсәк. Ләкин беҙҙең алда - ҙур эшмәкәрлек даирәһе, һоҡландырғыс, ә иң мөһиме, реаль етди перспективалар. Һеҙҙең бөтәгеҙгә лә, ғаиләгеҙгә, туғандарығыҙ һәм яҡындарығыҙға ныҡлы һаулыҡ, ҙур бәхеттәр, рух күтәренкелеге, Башҡортостаныбыҙ һәм бөтә Рәсәй файҙаһына емешле эшләүегеҙҙе теләйем!"

АФАРИН!

# ХЫЯЛДАРҒА ҠАНАТ ҠУЯ

## "Сулпылар"ҙың көмөш сыңы

**1992 йылдың 1 июнендә беренсе тапҡыр зәңгәр экрандарға сыҡҡан "Сулпылар" балалар телевизион тапшырыуын, моғайын да, республикабыҙ ҡала һәм райондарында йәшәүсе бар балалар ҙа яратып ҡарайҙыр. Йылдың иң мөғжизәле байрамы - Яңы йыл алдынан "Сулпылар" конкурсы үҙ еңеүселәрен билдәләне. Гран-при яулаусы Күгәрсен егете Нәғим ШӘРИПОВ үҙенең шатлығы менән уртаҡлаша.**

(Дауамы 5-се биттә).



СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибар иткәне барҙыр: беҙҙә рубрикалар бик күп. Ҡайһылары гәзиттең һәр һанында урын ала, ҡайһылары һирәгерәк бирелә, ҡайһылары бер аҙ онотолоборaҡ та тора. Шулай беҙ тормоштоң бөтөн өлкәләренә үтеп инергә, һәр береһе тураһында ниндәйҙер мәғлүмәт бирергә тырышабыҙ. Уҡыусыларыбыҙҙы ул рубрикаларҙағы һөйләшеүҙе дауам итергә саҡырабыҙ. Маҡсатыбыҙ билдәле инде: гәзит - милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүе ул, тигән хәҡиҡәтте тормошҡа ашырырға ынтылыуыбыҙ. "Сәйләү гәбе" лә бер аҙ онотолоборaҡ торғайны. Уны булдырғанда беҙҙең, әлбиттә, гәзитте уҡыусы әхирәттәребеҙ ҙә сәй артындағы һөйләшеүҙәре менән әүҙем уртаҡлашыр, тигән ышанысыбыҙ бар ине. Сөнки ҡатын-ҡыҙ сәй өҫтәле артында ниндәй генә гәп һатмай! Һүҙгә мауығып китеп, беҙҙең өсөн үтә гонаһлы ғәмәлгә - ғәйбәткә төшөп киткәнен дә һиҙмәй ҡала ҡайһы саҡта. Ошонан иҫкәртеү һымағыраҡ та беҙҙең был рубрика, йәғни әхирәттәрҙе аҡыллы, дөрөҫ һөйләшеүгә саҡырыу һымағыраҡ була инде. "Сәйләү гәбе" тигәне ят тойолмаһын, сәйләү - сәй эсеү, гәбе - гәп һатыу, тигәнде аңлата булыр. Шулай итеп, был юлы сәй өҫтәле артында күренекле яҙыусыбыҙ Мәрйәм апай БУРАҠАЕВА менән гәпләшәбеҙ.**

# САМАУЫРЫҢДЫ ҠАЙНАТ ТА...

## күршеңде сәйгә саҡыр

**➔ Мәрйәм апай, Өфөлә һинең ҡунаҡсыл һәм башҡорт аштары батшаһы икәнеңде белмәгән кеше һирәктер. Әммә халҡыбыҙҙың ошо матур йолаһы көнитмешебеҙҙән дә, ҡаныбыҙҙан да юйыла бара, ахры. Исмаһам, ошо гәзитте уҡыусыларҙың иҫенә төшөрәйек әле башҡорт ҡунаҡсыллығы тураһында.**

- Элек-электән башҡорттарҙа ҡунаҡҡа саҡырышыуҙың төп маҡсаты - ул аралашыу, фекер алышыу, туғанлыҡты нығытыу булған. Хәҙер генә ул халыҡ табынға сәбәпһеҙгә йыйылмай, йә тыуған көндәрҙе, йә башҡа берәй ваҡиғаны сәбәп итеп саҡырыша. Элегерәк беҙҙең атай-әсәйҙәр ҙә, беҙ үҙебеҙ ҙә әле бер ниндәй сәбәп булмаһа ла, тиҙ генә күмәкләшеп йыйылышып алыр инек. Шулай уҡ ҡыҙыл даталар уңайы менән дә ҡунаҡҡа саҡырышыу ғәҙәте булды. Беҙ аҙна һайын тиерлек ҡунаҡҡа йөрөшә, хатта бөгөн - миндә, икенсе аҙнала - һиндә, тип, көндәрҙе бүлешеп ҡуя торғайныҡ. Табында йыр тыңлау кеүек бик матур йола бар ине. Мәҫәлән, беҙҙең таныштар араһынан Спартак Ильясов, Иншар Солтанбаев, шулай уҡ ауылдан башҡа йырсылар килһә, таныштарыбыҙҙы йыя һалып, уларҙы өйҙән-өйгә йөрөтөп йырлата торғайныҡ.

Ҡунаҡҡа бер үк фекерле, бер үк зауыҡлы, донъяға ҡарашы бер үк булған кешеләрҙе бергә йыйыу һәйбәт. Мин шулай уҡ ҡунаҡҡа балаларҙы ла бергә саҡырырға тырышам, сөнки уларҙы башҡорт мөхитендә аралаштырыу, башҡортса һөйләшергә өйрәтеү - беҙҙең бурысыбыҙ. Университетта беҙҙең төркөмдә уҡығандарҙың бөтәһененең дә балалары өйҙә тик башҡортса ғына аралашып үҫте. Быға беҙҙең ҡунаҡтарҙа башҡортса аралашыуыбыҙ ҙа сәбәпсе булғандыр.

**➔ Мәрйәм апай, башҡорт ғаиләһенә ҡунаҡҡа килгән кеше, әлбиттә, башҡорт кухняһы ризыҡтарынан ауыҙ итергә тейеш бит инде. Һәр хәлдә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының өйөндә бер генә әҙер ризығы булмағанда ла, ондан тиҙ генә ниҙер әүәләй һалырға һәләтле икәне һәр кемгә билдәле...**

- Мин үҙем ҡунаҡ саҡырғанда мотлаҡ милли ризыҡтарыбыҙҙы әҙерләйем, аралашып йөрөгән башҡа башҡорт ғаиләләре лә ошо уҡ йолаға тоғро. Һимеҙерәк иттән бишбармаҡ бешерәм, һурпаһын мотлаҡ ҡорот һалып бирәм.

Эйе, ҡапыл килеп ингән ҡунаҡҡа тиҙ генә бешереп ебәрә торған ризыҡтар өлгөһө лә бар башҡорт кухняһында. Мин, мәҫәлән, һөткә йомортҡа, тоҙ, он һалып туҡыйым да, шуны көнбағыш майы һалынған табала ғына ҡойоп ебәрәм. Был ризыҡҡа үҙем "Сараһыҙҙың көнөнән" тип исем дә ҡушҡанмын. Әле лә: "Һин әллә нисек еңел генә итеп ҡоймаҡ ҡоя торғайның", - тип хәтерләй таныштарым.

Магазинға сығып йүгергәнсе, ҡул осонда тиҙ әҙерләй торған аш-һыуың булыуы һәйбәт. Ауылда шундай әйтем дә бар: "Йүнле ҡатын һыуҙан, тоҙҙан, ондан, сәйҙән өҙөлмәҫ". Ысынлап та, ҡунаҡ кеше ҡасан килеп инһә лә, өйҙә икмәгең булмаһа, тиҙ генә нимәлер әүәләп, бешереп ебәрерлек он булырға тейеш. Мин дә ҡала шарттарында йәшәһәм дә ондан, йомортҡанан, тиҙ генә әҙерләп ебәрә алырлыҡ ризыҡтарҙан өҙөлмәҫкә тырышам. Һәр ваҡыт өйөмдә ҡабарып ултырған ҡамырым да була. Һурпаны ла алдан әҙерләп ултыртып ҡуям. Иҫкәртеүһеҙ килеп ингән ҡунаҡҡа ҡуйырға талҡан бик уңайлы.

Ҡунаҡтар менән оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултырыуҙар, уйҙар менән уртаҡлашыу, фекер алышыуҙар бик яҡшы. Ҡунаҡҡа йышыраҡ саҡырышып тороу кәрәк. Һәм мотлаҡ балалар менән саҡырырға кәрәк, сөнки улар уҙ-ара таныша. Бәләкәй сағында бер-береһен танып, бергә уйнап үҫкәндәр, бер табында сәй эскәндәр ҙурайғас та бер-береһен онотмай. Балаларҙы мотлаҡ таныштырып, аралаштырып үҫтерергә кәрәк. Ҡунаҡҡа саҡырышыуҙың төп маҡсаты итеп тә алырға мөмкин хәҙер балаларыбыҙҙы аралаштырыуҙы.

**➔ Мәрйәм апай, бер яңы йылдан икенсеһенә күсә килгән хыялым менән уртаҡлашайыммы? Ауылда тыуып үҫкән, ғүмеренең байтаҡ өлөшөн ҡалала йәшәп үткәргән кешеләргә хастыр был хыял. Ҡыҙыҡ ҡына ул: биш сотый самаһы ғына ер участкам булһын, унда бүрәнәнән һалынған йортом, мунсам торһон. Яңы йылды ҡаршылаған кистә шартлатып мунса яғам, ихатам уртаһына өҫтәл ҡуйып, еңелсә табын ҡороп, ҡуҙлы самауырҙы борхолдатып ҡайнатырға ултыртам. Мунсанан сабынып сығам да, "Инеп кенә сығығыҙ әле!" тип, күршеләрҙе саҡырам. Бергәләп, асыҡ һауала самауырҙан сәй яһап эсеп, бер нисә минут ҡына булһа ла шаярып-көлөшөп алабыҙ. Шунан инде мунса инһәң дә була...**

- Әйҙә, улай булғас, ауылдарҙа йәшәүсе һинең хыялың ғәмәлдә булған туғандарға, милләттәштәргә өндәшәйек. Яңы йыл кисендә телевизорға теклəп, Канар утрауҙарында ял иткән йондоҙҙарға ҡарап, уфтанып ултырмағыҙ. Йондоҙҙар тормошо ғына тормош тип уйлап, улар ғына бәхетле, тип иҫәпләп, яңылышмағыҙ. Эргәгеҙҙәге бәхетте күрергә өйрәнегеҙ. Ғүмер ул йәшәгән йылдар түгел, иҫтә ҡалған мәлдәр. Ҡалаларҙа йәшәгән күптәрҙең хыялы ғына булған ысынбарлыҡты файҙалан, әйҙә: шартлатып мунсаңды яҡ, урамыңа өҫтәл ҡуйып, самауырыңды ҡайнат, күршеләреңде саҡырып, асыҡ һауала боҫон борхоп ултырған самауырҙан сәй яһап эсер. Яңы йыл менән!

**- Яңы йылды кем ошолай ҡаршылай ала? Беҙгә шул хаҡта яҙып ебәргәндәргә, әлбиттә, күстәнәс! Яңы йыл менән!**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**



НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Үтеп барған йылда республика һәм федераль бюджеттан 850 йәш ғаилә ярҙам алған, 285 йәш белгес "Ауылды социаль үҫтереү" программаһы буйынса йәшәү шарттарын яҡшыртҡан, 453 йәш ғаилә "Үҙ йортом" программаһында ҡатнашҡан.

✓Конгресс-холда Йәштәрҙең башланғыстарын яҡлау һәм үҫтереү йылын ябыу тантанаһы булып үтте. Ҡала-район хакимиәттәре башлыҡтары, урындағы йәштәр бүлектәре етәкселәре йыйылған сарала БР Премьер-министры Раил Сарбаев ҡатнашты. Тантанала йәштәр сәйәсәтен уңышлы тормошҡа ашырған Сибай, Учалы, Өфө,Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Күмертау, Октябрьский ҡалалары, Туймазы, Ишембай, Илеш, Бишбүләк, Мәләүез, Мәсетле, Яңауыл райондары, ҡайһы бер ойошмалар, предприятиелар билдәләнде.

✓Республика профсоюз ойошмалары үҙ ағзаларының балалары өсөн өс йөҙ мендән ашыу бүләк әҙерләгән. Ҡышҡы каникул мәлендә балалар һәм үҫмерҙәр өсөн Яңы йыл иртәләре, театрлаштырылған тамашалар, өлкән синыф уҡыусылары, студент һәм эшсе йәштәр өсөн ял кисәләре ойоштороласаҡ.

✓"2009 йылдың уңышлы проекттары 2010 йылда әһәмиәтле программаларға әүерелергә тейеш", тип белдерҙе БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев оператив кәңәшмәлә. Премьер киләһе йыл башына "Ғаилә", "Шәхси хужалыҡ" программалары проекттарын һәм аҙ ҡатлы төҙөлөштө артабан үҫтереү программаһын әҙерләргә ҡушты.

✓2009 йылда ярҙамсы хужалыҡ алып барыусыларға хаҡты 60 процентҡа кәметеп һәм артабан аренда нигеҙендә тапшырып, ауыл хужалығы техникаһы һәм малсылыҡ өсөн ҡорамалдар һатып алыуға республика бюджетынан 200 млн һумдан ашыу аҡса бүленгән. Һөҙөмтәлә хужалыҡтар "Беларусь" маркалы 230 трактор, 471 берәмек башҡа ауыл хужалығы техникаһы һәм малсылыҡ өсөн ҡорамалдар алған.

✓Боҙҙа мотоуҙыш буйынса донъя экс-чемпионы һәм Европаның дүрт тапҡыр чемпионы Дмитрий Буланкин Рәсәйҙең шәхси сирекфиналында еңеп, бер үк ваҡытта Башҡортостан чемпионы исемен дә яуланы. Өфөнөң "Строитель" стадионында булып үткән чемпионатта ул 27 мәрәй йыйҙы. Икенсе урында ла беҙҙең яҡташ - Сергей Балтачев.

*✓ Сталиндың күптән инде теге донъяла булыуына ҡармаҫтан, уның өҫтөнән мотлаҡ рәүештә суд үткәрелергә тейеш. Гитлер, Пиночет, башҡа тирандар өҫтөнән булған хөкөм кеүек үк.*

АҘНА ШАҢДАУЫ

# СТАЛИН ҮЛҺӘ ЛӘ, УНЫҢ ЭШЕ ЙӘШӘЙ,

## йәки "Бөйөк юлбашсы"ны кем һәм ҡасан хөкөм итер икән?

**Бәләкәй сағымдағы иң сағыу хәтирәләремдең береһе - тыуған ауылым Таулыҡай аша көнбайышҡа, Ҡана ҡасабаһы яғына үткән мәғрүр "ЗИЛ"дарҙың тәҙрәләренә беркетеп ҡуйылған фотоһүрәт. Сталин, тип ҡыҫҡа ғына аңлаттылар миңә. 1970 йылдарҙа булды был. Сталиндың шәхес культы күптән фашланған. Был хаҡта КПСС-тың XX съезында сығыш яһаған Никита Хрущев та вазифаһынан бушатылған. СССР менән партия һәм уның генераль секретары Леонид Ильич Брежнев идара итә. Бөгөн тарихсылар тарафынан "торғонлоҡ йылдары" тип аталған осор саҡ башланып ҡына тора. Илдә һил. Тыныс. Әле Брежневтың күкрәген тиҫтәләгән орден-миҙалдар, алтын йондоҙҙар биҙәп өлгөрмәгән. Афған һуғышы башланмаған. Магазиндарҙа ла аҙмы-күпме әйбер бар. Ауыл халҡына йорттар төҙөп сығырға, мал ишәйтергә саҡ ҡына булһа ла иркенлек тыуҙы. Сталин хаҡында йәмғиәттә ләм-мим. КПСС тарихында ғына уның шәхес культын фашлау хаҡында бер һөйләм менән әйтелгән. Сәйәси золом ҡорбандары, ГУЛАГ хаҡында һүҙ ҙә юҡ.**

Нишләп уны водителдәр шул хәтлем ихтирам иткәндер инде, тигән уй тыуа миндә. Ул СССР менән идара иткән саҡта илдә тәртип булды, тип төшөндөрҙөләр. Сталин етмәй, ул һеҙҙе ошолайтып тотор ине, тип йоҙроҡтарын төйҙөләр оло быуын кешеләре үткән быуаттың 80-90-сы йылдарында. Ул саҡтарҙан утыҙ йыл самаһы ваҡыт үтеп тә китте. Быйыл Сталиндың тыуыуына 130 йыл, ә вафат булыуына 56 йыл тулды. Ә йәмғиәтебеҙҙә уның хаҡында бәхәс һаман тынмай. Уның хаҡында һаман яҙалар, һаман һөйләйҙәр, һаман кино төшөрәләр. Илебеҙҙең өҫтөндә ҡалҡҡан ҡурҡыныс бер шәүлә кеүек уның исеме.

Үткән аҙнала, әллә башҡа тема булмағанлыҡтан, әллә инде ҡапыл ғына аңлап та булмаған тәрән бер мәғәнә менән, үҙәк ваҡытлы матбуғат саралары береһенән-береһе Сталин исеме төшмәне. Телевизорҙа ла уның хаҡында ярһып-ярһып бәхәсләштеләр. Сталин бөгөн популяр. Иосиф Виссарионович модала. Сталин уның дәүерендә йәшәгән кешеләргә генә түгел, бөгөнгө йәштәргә лә оҡшай. Хатта сәйәси золомдарға эләккән кешеләр ҙә үҙҙәренең ыҙа сигеүендә уны ғәйепләмәй. Мәскәүҙә иһә метро станцияларының береһендә тарихи реконструкция һылтауы менән уның исеме ҡалҡып сыҡты. Ҡалаларҙа, ҡасабаларҙа уның һәйкәлдәрен тергеҙәләр, ҡабаттан ҡуялар. Хатта Волгоградҡа уның исемен ҡайтарып биреү хаҡында фекер алышыу бара. Илдең баш ҡалаһында Сталиндың тыуыуына 130 йыл тулыу уңайы менән тантаналы ултырыш үткәрелде.

Ни булды беҙгә? Әллә хәтеребеҙ шулай ҡыҫҡамы? Әллә беҙ кисә ни булғанын бөгөн иҫләмәйбеҙме? Әллә беҙгә һаман ҡамсылап тотҡан "ҡаты ҡул" кәрәкме?

Берәүҙәр уны СССР тигән бөйөк дәүләтте төҙөүсе етәксе булараҡ ҡабул итә, Гитлерҙы еңеп сығыусы мәшһүр полководец тип атай, Рәсәйҙе һуҡа менән ҡабул итеп, атом бомбаһы менән ҡалдырыусы тип күккә күтәреп маҡтай. Дөрөҫмө былар? Бөйөк дәүләт тарҡалды. Юҡ ул бөгөн. Кем ғәйепле быға? Ельцин, Шушкевич һәм Кравчукмы? Әллә ошо дәүләтте "ҡамсы һәм перәник" ярҙамында ҡанлы ҡулы менән ҡоршап ҡуйыусы Сталинмы? Уның яуыз уйы менән болғанған халыҡтар һаман булһа ла үҙ-ара уртаҡ фекергә килә алмай, ҡан ҡойоуын, йә булмаһа, ыҙа сигеп йәшәүен дауам итә. Месх төрөктәре, мәҫәлән, тыуған ерһеҙ ҡалды. Улар йәшәгән Үзбәкстан бөгөн айырым дәүләт. Ә һөргөнгә тиклем ғүмер иткән Грузия ана тора. Кемгә дәғүә белдерергә? Кемдән ғәҙеллек талап итергә? Ҡырым татарҙары ла әле булһа ла үҙ ерҙәре өсөн көрәште дауам итә. Сталин да юҡ, ул төҙөгән дәүләт тә пыран-заран килде, ә тотош халыҡтарҙың яралары һаман уңалмаған. Айырым кешеләрҙең яҙмыштарына туҡталып тороу түгел, "халыҡтар атаһы"ның мәкерле уйы менән бөгөнгә тиклем ҡаңғырған милләттәрҙе генә атап сығыу арыуыҡ ваҡытты алыр ине. Кавказда ғына - осетиндар, абхаздар, ингуштар, ҡарасәйҙәр, балҡарҙар, нуғайҙар, месх төрөктәре. Ә тағы ла тотошлайы менән Себергә һөрөлгән ҡалмыҡтар? Ә бер төн эсендә милли интеллигенцияһыҙ тороп ҡалған беҙ, башҡорттар? Тиҙ генә онота һалдыҡмы шуны?

Сталиндың шәхес культы - уның фажиғәһе, тиҙәр бөгөн ҡайһы бер тарихсылар һәм публицистар. Шулай булмаһа ярар ине. Уның үҙен күккә күтәреп маҡтауҙы ойоштороуы күҙгә ташланып тормаймы ни? Рәсәй кешеһенә Алла кимәлендәге батша кәрәк булғанын аңлау менән үк, ул үҙен Алла кеүек тота башлай. Уның бөтә ил буйлап ҡалҡҡан һәйкәлдәре лә бит тораташтар кеүек.

Сталин ғүмер буйына абсолют власҡа ынтылған кеше. Ә Власть - ул үҙен яратҡандарҙы тулыһынса үҙенә буйһондора. Үҙенә нисек кәрәк, шулай бөгә. Сталиндың ҡушыуы менән даими рәүештә үткәрелеп торған репрессиялар нимәгә кәрәк булды, тип уйлайһығыҙмы? Ул теге йәки был милләтте, йәки социаль ҡатламды яратмауҙан, йәки уларҙың ысынлап та дәүләт ҡоролошона янауынан түгел бит. Ул Власҡа килтерелгән ҡорбандар. Үҙ аллы фекер йөрөтә алған, уйлы, аҡыллы, ирек һөйөүсән, тимәк, ҡасан да булһа власҡа дәғүә итә алғандар ғына түгел, ә етәкселектәге кешеләрҙең кәмселектәрен, етешһеҙлектәрен күрә һәм башҡаларға был хаҡта еткерә алғандар золомға тарттырылған бит. Яландан башаҡ йыйыусы баласағаларҙы һөргөнгә оҙатыу, муллаларҙы, ғөмүмән, репрессияларға эләккән барлыҡ ҡатлам вәкилдәрен, ғаиләләре-ние менән ҡырып-һепереп "лагерь саңына" әүерелдереү власть менән нисек бәйле һуң, тип аптырарһығыҙ. Шаһиттар ҡалмаһын өсөн эшләнгән был. Баш күтәргән башҡорттарҙың да балаларын үҙ-ара таратып алып, урыҫ һәм христиан итеп тәрбиәләгәндәр ҙә баһа. Батша заманындағы карателдәр советтарҙан мәрхәмәтлерәк булған икән, тип уйлап ҡуйыла. Улар, исмаһам, балаларға ғүмер биргән. Ә сталиндыҡылар бит тотош ғаиләләрҙе төбө-тамыры менән йолҡоп алып, тарих сүплегенә быраҡтырҙы. Золомға дусар ителгән күренекле шәхестәр әле аҙмы-күпме иҫтә. Ә ҡалғандары? Уларҙы кем хәтерләй? Улар кемгә кәрәк бөгөн? Йәмғиәттәге был хәл нилектән килеп сыға һуң? Нишләп тарихи хәтеребеҙ тиҙ генә, бер-ике быуын эсендә генә юйыла икән? Был хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ бармы?

Һәр бер кеше, уның башҡарған һәр бер эше халыҡ алдында, йәмғиәттә ниндәйҙер баһа ала. Кәрәк тип табылһа, хөкөмгә тарттырыла. Кешелек шуға ҡоролған. Юғиһә беҙ ике аяҡта атлап, һөйләшеп йөрөһәк тә, техника йәһәтенән ғәйәт ныҡ үҫешһәк тә, йыһанға осһаҡ та, кешелек сифаттарын юғалтасаҡбыҙ. Үткәненә баһа бирмәйенсә, йәмғиәт алға бара алмай. Эйе, Сталиндың енәйәттәре хаҡында тиҫтәләгән китаптар яҙылды, кинофильмдар төшөрөлдө, тарихсылар уның хаҡында даими сығыш яһай. Уның ҡорбандары бөгөн аҡланды. Хатта уларға аҡсалата компенсация ла түләнде. Золом ҡорбандарына ил буйлап һәйкәлдәр ҡуйылды. Әммә был ғына етәме? Йәмғиәткә ошо ғына етте булып сығамы? Юҡ. Әлбиттә, юҡ. Сталиндың күптән инде теге донъяла булыуына ҡармаҫтан, уның өҫтөнән мотлаҡ рәүештә суд үткәрелергә тейеш. Гитлер, Пиночет, башҡа тирандар өҫтөнән булған хөкөм кеүек үк. Бер-ике көнлөк кенә түгел, бер нисә аҙна йәки ай барыуы ихтимал ул процестың. Шаһиттар сығыш яһаһын, адвокаттары ла булһын уның, һәм, әлбиттә, ғәйепләүселәр ҙә. Дәүләт кимәлендә ойошторолорға тейеш был эш. Етәкселәребеҙ мотлаҡ рәүештә сығыш яһарға, Сталин тураһындағы мөнәсәбәтен белдерергә тейеш суд барышында. Ә бит Сталинды яҡлаусылар еңеп сығыуы мөмкин был процеста, тиеүселәр табылыр. Әлбиттә, улай ҙа булыуы ихтимал. Шуның өсөн дә суд бит ул. Тик онотorға ярамай - тап ошо суд бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙең киләсәккә ынтылышын асыҡлаясаҡ та инде. Йә беҙ илебеҙҙең генә түгел, донъяның иң яуыз тирандарының береһе булған Сталиндың тарихына ошо процесс менән нөктә ҡуясаҡбыҙ һәм, ниһайәт, үткәнебеҙҙең был битен дә ябасаҡбыҙ. Йә, алда беҙҙе тағы ла күп кенә ереле-ваҡлы сталиндар көтәсәк. Һәм уның шәүләһе илебеҙ өҫтөндә әле бик оҙаҡ торасаҡ. Кемгәлер иҫкәртеү, ә кемгәлер өмөт билдәһе булып.

**Таһир ИШКИНИН.**

ЙОНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...

## ЮЛБАРЫҪ КЕҮЕКМЕН

Киләһе йыл минең өсөн бик мөһим һәм яуаплы йыл, сөнки ул - минең йылым. Юлбарыҫ үҙе лә минең иң яратҡан хайуаным. Был йондоҙлоҡ аҫтында тыуған кешеләргә ниндәй сифаттар хас булһа, улар миндә лә күҙәтелә. Мин һәр ваҡыт алдыма маҡсаттар ҡуйып йәшәйем. Уларға өлгәшеү юлында артыҡ сабырһыҙлыҡ күрһәтмәйем, уңайлы мәлен көтөп торам да, бер ынтылыуҙа эләктереп тә алам.

Бынан ун ике йыл элек, 1998 йыл да, ауырлыҡтар ил кимәлендә күп булды. Дефолт заманы булды ул. Беҙ, ижад кешеләре, уны еңелерәк кисерҙек, әлбиттә. Унан һуң заманалар рәтләнеп китте. 2010 йыл да бөтә яҡлап та кешеләргә, бигерәк тә был йылда тыуғандарға, яҡшы булырға тейеш. Киләһе йылды, һәр ваҡыттағыса, яңы маҡсаттар ҡуйып, яҡты өмөттәр бағлап, театр һөйөүселәрҙе яңы спектаклдәр менән һөйөндөрөрмөн, тигән ышаныста ҡаршы алам.

**Азат НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә тағы ла телефон мутлыҡтары тураһында ишетелә башланы. Уларҙың ҡорбандары, элеккесә, ҡарттар. Телефондан шылтыратыусы уларҙың яҡындарының ниндәйҙер бәләгә осрауы тураһында хәбәр итә, түләһә, уға үҙ ярҙамын тәҡдим итә. Ҡарттарҙың уларға ышанып, күпмелер аҡсаһынан яҙған осраҡтары байтаҡ. Бындай шылтыратыуҙар булған хәлдә милицияға хәбәр итергә кәрәк, тип иҫкәртәләр Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

✓Быйыл ун бер айҙа Өфөлә 171 ришүәт биреү осрағы асыҡланған. Енәйәтте асыҡлау проценты - 97,5. Хоҡуҡ һаҡсылары әйтеүенсә, ришүәтселек бигерәк тә мәғариф, медицина һәм дәүләт органдарында йыш осрай.

✓Йыл башынан Башҡортостанда 1016 транспорт сараһы урланыуы тураһында белдерелгән. 925 техника табылған, 91-е эҙләнә.

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Мәскәүҙә уҙған Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы һәм РФ Президенты Советының берлектәге ултырышында ҡатнашты. Сарала 2010-2011 йылдарҙа мәғлүмәти йәмғиәт үҫеше мәсьәләләре һәм электрон хөкүмәт булдырыу һөҙөмтәләре ҡаралды. Ултырыш Президент Дмитрий Медведев рәйеслегендә үтте.

✓Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса комиссияһы 2010 йылға "Башкирэнерго" асыҡ акционерҙар йәмғиәте электр энергияһына яңы тарифтар билдәләне. 1 ғинуарҙан газ плитәләре менән йыһазландырылған өйҙәрҙә йәшәгән ҡала халҡы электр энергияһының 1 киловатт/сәғәтенә 1 һум 74 тин түләйәсәк. Әгәр ҙә өйҙә стационар электр плитәләре ҡуйылған икән, ул сағында киловатт/сәғәтенә 1 һум 20 тин түләргә тура киләсәк. Ауыл халҡы 1 һум 10 тин урынына 1 һум 21 тин түләйәсәк.

✓БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың сираттағы ултырышында депутаттар "Учалы районында географик объекттың исемен үҙгәртеү тураһында" ҡарар ҡабул итте. Уға ярашлы, Учалы ауыл биләмәһенә ҡараған Мулдаш ауылы Өргөн ауылы итеп үҙгәртелә. Бының сәбәбе: БР Үҙәк дәүләт тарих архивындағы 1940-1950 йылдарҙағы документтарҙа Мулдаш ауылы Өргөн тип алынған. Халыҡ телендә лә был ауыл Өргөн тип йөрөтөлә. Районда Илсеғол ауыл биләмәһенә ҡараған тағы бер Мулдаш ауылы бар.

**✓ *Өфөлә 250 тирәһе ошондай тамаша нөктәләре бар икән. Шуларҙың 59-ын тикшергәндән һуң, 29-ында етди етешһеҙлектәр табылған. Өс төнгө клуб ябылған.***

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Беҙҙә Яңы йылға әҙерләнгән кеүек башҡа бер ниндәй байрамға ла әҙерләнмәйҙәрҙер. Сатирик Задорнов әйтмешләй, кеше бер төндә ашар өсөн декабрь буйы пакетлап-пакетлап аҙыҡ-түлек ташый. Шаяртыу булһа ла, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк ап-асыҡ булып сағыла.**
**Ауыл, ҡала, тотош республика кимәлендә лә әҙерләнәләр был байрамға. Өфөнө генә алайыҡ. Уның нисек Яңы йыл ҡаршыларға әҙерләнгәнен һанап сығыу өсөн тотош бер исемлек төҙөргә кәрәк булыр ине. Әммә беҙ уларҙың бер нисәһен генә барлап үтәйек. Улар байрамға ҡағылмаған да кеүек, ләкин был тәү ҡарағанда ғына шулай тойола. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ошо сараларҙан тыш Яңы йыл байрамы байрамса булмаҫҡа ла мөмкин бит.**

# ҠЫШ БАБАЙҘАР...

## баш йортобоҙ Өфөлә йәшәй

**Янғын хәүефһеҙлеге. Яңы йылды киң ҡолас йәйеп ҡаршыларға яратҡандарға ҡағыла.** Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнгәндә, ғәҙәттә, беренсе булып Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, шыршы хәстәрләнә. Ләкин быйылғы Яңы йылға әҙерлектең төп темаһы - янғын хәүефһеҙлеге булды. Пермдәге төнгө клуб ваҡиғаларынан һуң беҙҙең генә түгел, бар Рәсәйҙең янғын һүндереүселәре ныҡлап эшкә тотондо. Күршеләрҙән фәһем алдыҡ, тип, беҙҙекеләр ҙә төнгө клубтарҙы, рестарандарҙы, ғөмүмән, халыҡ күпләп күңел асҡан урындарҙы тикшереп сыҡтылар. Өфөлә 250 тирәһе ошондай тамаша нөктәләре бар икән. Шуларҙың 59-ын тикшергәндән һуң, 29-ында етди етешһеҙлектәр табылған. Өс төнгө клуб ябылған. Шуныһы ҡыҙыҡ: был клубтарҙың күбеһе яңыраҡ ҡына тикшереү үткән булған. Ләкин уларҙа янғын хәүефһеҙлеге тыуҙырған етешһеҙлектәр барлығын Пермь ваҡиғаларынан һуң ғына шәйләп ҡалғандар...

**Медицина күҙәтеүе. Балаларға һәм уларҙың ата-әсәләренә ҡағыла.** "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы Һаулыҡ һаҡлау, Мәғариф министрлыҡтарына һәм Өфө ҡала округы хакимиәтенә Яңы йыл байрамдарын үткәреү буйынса рекомендациялар менән мөрәжәғәт итте. Ул тәҡдимдәр араһында... яңы йыл сараларында мотлаҡ медицина хеҙмәткәрҙәре булыуы тәьмин ителергә тейешлеге тураһында ла иҫкәртелә. Кемдә тымау, йүткереү симптомдары бар, улар байрамға индерелмәй, тимәк. Башҡаларҙың һаулығын ҡайғыртыу маҡсатынан сығып эшләнә инде былар. Бер көн байрам итәм тип, ғүмерҙе ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булмай ҙа инде! Үтеп барған йыл бар халыҡты сусҡа киҙеүе менән ҡурҡытты бит. Шаңдауҙары һаман тертләтә әле.

**Йәрминкәләр. Яңы йыл табынында натураль ашамлыҡтар ғына күрергә теләүселәргә ҡағыла.** Инде традицияға ингән йәрминкәләр ҙә Яңы йылға әҙерләнеүселәрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итте. 12 декабрҙән алып һәр ял һайын баш ҡаланың ун биш майҙансығында үткән йәрминкәләр өфөләләргә осһоҙораҡ хаҡка ит, һөт, йәшелсә-картуф һатып алыу мөмкинлеге бирҙе. Яңы йылды ҡаршылаған бер төн табыны өсөн ай буйы йәрминкә тапағандар ҙа булмаған түгелдер, булғандыр. Ашау өсөн йәшәгәндәр ҙә бар бит әле беҙҙә. Хәйер, йәшәр өсөн ашағандарға ла кәрәк инде ул йәрминкәләрҙәге натураль, үҙебеҙҙең республикала етештерелгән ризыҡтар. Ҡыш бабай менән шыршыға ҡарап туйып булмай бит. Үткән аҙналағы йәрминкәләрҙә ҡала халҡы 144 тонна ит һатып алған да инде. Йәрминкәләр бөгөн дә, иртәгә лә, йәғни 26-27-дә лә, үҙ эшен дауам итәсәк.

**Боҙ майҙансыҡтары. Өйҙә ултырыуға ҡарағанда, асыҡ һауалағы әүҙем ялды артыҡ күргәндәр өсөн.** Быйыл бындай майҙансыҡтар төҙөү артыҡ ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Тәүҙә иретеп торҙо, һуңынан ҡапыл туңдырҙы. Яңы йылға ниндәй ҡыҫылышы бар ул боҙ майҙансыҡтарының, тиһегеҙме? Ҡала халҡы, бигерәк тә өфөләләр, Яңы йылды ҡаршылаған төндә лә, унан һуңғы каникулдарҙа ла мотлаҡ боҙ майҙансыҡтарында, катоктарҙа шыуырға яратыусан. Шуны иҫәпкә алып, Өфөлә быйыл боҙ майҙансыҡтарының иҫәбе байтаҡҡа арттырылды. Ҡаланың төньяғы ла иғтибарһыҙ ҡалманы. Шаҡша биҫтәһендә "Юлаевсы" тигән ябыҡ боҙ майҙансығы сафҡа инде. Ул "Салауат Юлаев" хоккей клубының үҫмерҙәр командалары шөғөлләнһен өсөн эшләнгән.

**Хаталар өҫтөндә эш. Һәм Аҡмулла саҡырыуҙары.** Яңы йылға ингәндә, баш ҡала хаталы яҙыуҙарҙан да арынырға ҡарар итте. Өфө ҡала округы хакимиәтендәге "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия ултырышында хакимиәт башлығы Павел Качкаев ҡәтғи талап ҡуйҙы: киләһе йылда III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы буласаҡ һәм баш ҡалаға бөтөн донъянан ҡунаҡтар киләсәк. Беҙ уларҙы хаталы яҙыуҙар менән ҡаршылай алмайбыҙ! Был эш - ойошмалар, предприятиелар, һатыу нөктәләре, дауаха-




## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө миллион халыҡлы башҡа ҡалалар араһында йән башына тауар әйләнеше күләме буйынса - иң яҡшыһы, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм уртаса эш хаҡы буйынса - икенсе урында. Өфө демографик күрһәткестәр буйынса ла алдынғы. Быйыл ун бер айҙа ғына баш ҡалала 11,5 мең бала тыуған, был 2008 йыл менән сағыштырғанда 466 балаға күберәк. Халыҡтың тәбиғи үҫеше 1,5 мең кеше тәшкил иткән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев йола буйынса Яңы йыл байрамы алдынан журналистар менән осрашты һәм үтеп барған йыл һөҙөмтәләре менән таныштырҙы, киләһе йылға күҙаллауҙары менән уртаҡлашты. Дөйөм алғанда, Өфө башҡа миллионлы ҡалалар араһында үҙен бик лайыҡлы күрһәткән. Ғинуар-ноябрҙә сәнәғәт етештереү индексы 97 процент тәшкил иткән. Финанс көрсөгөнә ҡарамаҫтан, баш ҡалала быйыл 560 мең кв метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

✓Баш ҡалалағы Яңы йыл байрамдары саралары сиктәрендә"Вьюговей - 2010" фестивале асылды, ул ун бишенсе ғинуарға тиклем дауам итәсәк. Беренсе ғинуарға ҡараған төндә Рус дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда төп байрам тамашаһы буласаҡ. Ул 31 декабрҙә 21.00 сәғәттә башланасаҡ, 02.00 сәғәттә байрам фейерверкы буласаҡ.

✓Турнир таблицаһында "Металлург" (Магнитогорск) 1-се, СКА (Санкт-Петербург) 2-се, "Салауат Юлаев" 3-сө урында. Әммә был һандар ысынбарлыҡты дөрөҫ сағылдырамы һуң? Өҙөп кенә, юҡ, тип әйтергә кәрәк. Сөнки "Салауат Юлаев" тәүге ике командаға ҡарағанда 2 матчты кәмерәк уйнаған. Тимәк, уның запаста 6 мәрәйе (һәр еңеү өсөн 3 мәрәй) бар. Ә юлаевсылар унға-һулға мәрәй таратмай. Шуға күрә "Салауат Юлаев" ғәмәлдә беренсе урында, тип самаларға кәрәк. Өфөнөң боҙ майҙанында ике лидерҙың көс һынашы үтә дауыллы башланды. Бер минут эсендә юлаевсы Александр Радулов иҫәпте асты. Йәнә бер минут үттеме-юҡмы, ҡунаҡтар иҫәпте тигеҙләп тә ҡуйҙы. Артабан юлаевсы Владимир Антипов, унан һуң Виктор Козлов берәр гол индерҙеләр. Икенсе, өсөнсө осор ҙа шулай уҡ майҙан хужаларының өҫтөнлөгө менән үтте. Дөрөҫ, СКА хоккейсылары тағы ике шайба индерҙе, ә юлаевсылар иһә иҫәпте алтыға еткерҙе. Ике лидерҙың көс һынашында әлегә өсөнсө урында барған "Салауат Юлаев" байтаҡҡа көслөрәк булып сыҡты.

налар алтаҡталарындағы, урам, туҡталыш атамаларындағы хаталарҙы бөтөрөү өҫтөндә эш даими алып барыла баш ҡалала. Ыңғай үҙгәрештәр ҙә һиҙелә, хаталар элекке кеүек күҙгә салынып бармай. Әммә... яңы барлыҡҡа килгән объекттар әле генә башҡаларҙа төҙәтелгән хаталарҙы янынан ҡабатлай.

Әйткәндәй, баш ҡала урамдарындағы ҡайһы бер реклама таҡталарына хәҙер күренекле яҙыусылар әйткән аҡыллы һүҙҙәр яҙып эленде. Ҡала хакимиәтенең социаль реклама өлкәһендә тормошҡа ашырған уңышлы проекттарының береһе булды был. Башҡорт телендәгеләрен һанарға бер ҡулдың бармаҡтары етһә лә, киләсәктә уларҙың һаны күбәйер, тип ышанғы килә.

**Һәм ниһайәт... Яңы йыл төнөндә эскән күршеләренән ыҙа сиккәндәр өсөн.** Быйыл бөтөн Рәсәй кимәлендә дәүләт етәкселәре эскелек проблемаһы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланы. Баш ҡалала ла етәкселәр һәм эске эштәр органдары тарафынан ниндәйҙер саралар күрелеүе һиҙелә. Яңы йыл байрамы алдынан, мәҫәлән, "Лидер" үҫмерҙәр клубында, Өфө сәнғәт училищеһында һәм Орджоникидзе, Калинин, Октябрь райондары военкоматтарында үҫмерҙәр, йәштәр менән һөйләшеүҙәр, һыра алкоголизмы, насар эмоцияларҙы ауыҙлыҡлау һәм күңел төшөнкөлөгө сәбәпле килеп сыҡҡан проблемаларҙы аңлы рәүештә, иҫерткес ҡулланмайынса хәл итеүгә ярҙам буйынса семинар-лекциялар, психологтар менән осрашыуҙар үткәрелде. Был саралар - бәләкәй, әммә уларҙың әһәмиәте бәләкәй түгел. Бәлки, улар артабан йәштәр менән даими эш алымына әүерелер әле...

**Тағы ла күп нәмә тураһында яҙырға була.** Ләкин Яңы йылдың төп символы тураһында ла әйтергә ваҡыт етте. Утыҙ метр бейеклегендәге йәшел һәм тере шыршы баш ҡала хакимиәте алдындағы төп майҙандан урын алды. Мәскәү менән Петербургты һанамағанда, Красноярск менән Ҡазандан ҡала, Өфө шыршыһы ҙурлығы яғынан өсөнсө урында. Һуңғы йылдарҙа ҡуйылған яһалма шыршынан баш тартырға булды быйыл ҡала етәкселеге. Йыйып һүтеү ҙә ҡиммәткә төшә, металдан һәм пластмассанан эшләнгән конструкция туҙып та өлгөрҙө. Шуға күрә, яһалмаға ҡарағанда, Урал шыршыһы өфөләләргә хуш килер, тигән ҡарарға киленде. Шыршылар баш ҡаланың бөтә майҙансыҡтарында ла урын аласаҡ. Әлбиттә, ни тиклем генә матур булмаһын, шыршының урманда үҫеп




ултырыуы яҡшы ла бит...Кеше гәҙәттәре сәйер шул.

**Күп балаларҙың көтөп алған байрамы - Президент шыршыһы быйыл да Конгресс-холда үтте.** Унда республика ҡала һәм райондарынан уҡыу алдынғылары, төрлө фән олимпиадалары, спорт ярыштары еңеүселәре, фестивалдәр лауреаттары исеменә лайыҡ булған 680 уҡыусы ҡатнашты.

Президент шыршыһынан һуң, Баш ҡала шыршыһы һәм Социаль шыршы ла үҙе янына бәләкәй тамашасыларын йыйҙы. Уларҙың барыһына ла Президент бүләктәре - йыл символы йомшаҡ юлбарыҫ һәм тәм-том тапшырылды. Әйткәндәй, теләүселәр булһа, был тамашаны һәм "Бер ваҡыт Яңы йыл алдынан, йәки 32 декабрь" тип аталған мюзиклды Яңы йыл байрамынан һуң ҡарай аласаҡ.

**Ҡыш бабайҙар парады. "Ҡыш бабайҙар ҡайҙа йәшәй?" тип баш ватыусыларға мәғлүмәт.** Өфө ҡала округы хакимиәте инициативаһы менән быйыл өсөнсө тапҡыр үткәрелгән Ҡыш бабайҙар парады ла байрам сараларына айырыуса йәм өҫтәне һәм өфөләләргә күтәренке кәйеф бүләк итте. Унда ете районда урынлашҡан һәр предприятие һәм ойошманан берәр Ҡыш бабай ҡатнашты. "Өфөхимпром" Ҡыш бабайы Роберт Бирҙеғолов әйтеүенсә, бындай саралар кешеләргә көндәлек мәшәҡәттәргә сорналған тормошта мөғжизә һәм изгелеккә лә урын бар икәнен иҫкә төшөрөргә мөмкинлек бирә.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

*ЙОНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...*

## МАҠСАТҠА ЫНТЫЛЫУСАНМЫН

Көнсығыш календары буйынса ҡарап үтһәк, юлбарыҫ йылында тыуғандар ғәйрәтле, көслө, эшһөйәр, маҡсатҡа ынтылыусан була, тип яҙылған. Минең дә Юлбарыҫ йылында донъяға килеүем холоҡ-фиғелемә ниндәйҙер кимәлдә йоғонто яһаған кеүек, сөнки характеремда тап шул сифаттар өҫтөнлөк итә. Юлбарыҫҡа килгәндә, ул үҙ баһаһын белгән, ғорур ҙа, уҫал да, ажар ҙа йыртҡыс. Күҙҙәренән ут сәсеп, ергә ныҡлы баҫып, һәр ваҡыт табыш эҙләй һәм тапҡан табышын бер ваҡытта ла ҡулынан ысҡындырмай. Мин дә тормошта һәр ваҡыт алдыма маҡсат ҡуйып йәшәргә яратам һәм алдыма алғандан бер ваҡытта ла кире сигенмәйем. Аллаға шөкөр, ҡуйған маҡсаттарымды яуламай ҡалғаным юҡ. Шул уҡ ваҡытта мин бер ҡасан да юғалып ҡалмайым, ниндәй генә осраҡта ла үҙемде яҡларға әҙермен. Шул яғым менән юлбарыҫҡа тап киләм, тип уйлайым.

*Рита ТИМЕРҒӘЛИНА,*
*Дим районы 102-се башҡорт мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.*

*АФАРИН!*

# ХЫЯЛДАРҒА ҠАНАТ ҠУЯ

## "Сулпылар"ҙың көмөш сыңы

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

- Мин Күгәрсен районы Сирбай ауылында тыуып үҫтем. Әлеге ваҡытта Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының 6-сы класында белем алам. "Тамыр" студияһының бөтә тапшырыуҙарын да яратам, береһен дә ҡалдырмай ҡарап барам. "Сулпылар" телевизион йыр-моң бәйгеһендә ҡатнашырға ла күптән хыяллана инем, тик уңайы ғына сыҡмай торҙо. Һәм, ниһайәт, быйыл был хыялым тормошҡа ашты: минә "Сулпылар" йыр-моң бәйгеһендә ҡатнашыу бәхете тейҙе! Иллә ҡыуандым инде! Бәйгелә мин "Сал Урал" менән "Ҡара юрға" йырын башҡарҙым. Алдынғы урындарҙың береһенә әләгермен, тип өмөт итһәм дә, Гран-при алырмын, тип башыма ла килтермәгәйнем. Еңеүемә ифрат шатмын. Минән дә бигерәк, атайым, әсәйем, туғандарым өсөн ҙур шатлыҡ булды был еңеү.

"Сулпылар"ҙа ҡатнашыуым, "Тамыр" студияһына йөрөүем мине тағы ла үҫтерҙе, дәртләндерҙе. Республикабыҙҙың төрлө райондарынан йыйылған талантлы балалар менән дуҫлаштым. Улар менән шул тиклем күңелле!

Тик йырлап ҡына йөрөйҙәр был, тип уйлап ҡуймағыҙ тағы. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә әҙ, ти атайым. Ул мине күп һөнәрҙәргә өйрәтә, мин дә уның кәңәштәрен һәр саҡ иҫтә тоторға тырышам. Ә үҙем егеттәр батыр, баһадир, көслө булырға тейеш, тип һанайым. Шуға күрә күп ваҡытымды спорт менән шөғөлләнеүгә бүләм, төрлө спорт түңәрәктәренә йөрөйөм: саңғыла шыуырға, йүгерергә, футбол, волейбол уйнарға яратам. Тағы ла математиканан төрлө мәсьәләләр сисеү оҡшай.

Ә ҙур үҫкәс, табип булырмын, тип уйлайым, сөнки улар изге күңелле, яҡшы уйлы кешеләр. Киләсәктә яҡшы, белемле табип булып, кешеләрҙе төрлө сирҙәрҙән дауалағым килә.

Был еңеүемде мин Яңы, 2010 йылдың иң ҙур бүләге, тип ҡабул иттем. Ысынлап та, шунан да ҙурыраҡ бүләк көтөп буламы икән? Яңы йылда атай-әсәйемә, бөтә туғандарыма, дуҫтарыма иҫәнлек-һаулыҡ, уңыштар, ҡыуаныстар теләйем.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Витаминлы сәйҙәр

Киптерелгән 10-ар грамм миләш, әлморон емештәренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатҡас, 5 грамм мәтрүшкә үләнен өҫтәп, 10 минут төнәтергә. Был витаминлы сәй атеросклерозды булдырмай һәм матдәләр алмашыныуын яҡшырта.

Турап киптерелгән 5 грамм кишер, кесерткән япрағы, әлморон емешенә 1 грамм ҡара ҡарағатты өҫтәп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтегеҙ.

6-шар грамм әлморон, һырғанаҡ емештәрен, туралған 3 грамм бәпембә, 2 грамм татлы тамыр (солодка) тамырҙарын, 2 грамм һарыгүҙ (золотысячник) үләнен 1 стакан һыуҙа 10 минут ҡайнатҡас, 1 сәғәт төнәтеп, 20 грамм бал ҡушып эсергә.

## Әлморонло-баллы сәй

20 грамм әлморон емешен төйөп, ҡайнар һыу ҡушҡас, 10 минут ҡапҡасы ябылған һауытта талғын ғына ҡайнатырға. 10 минут төнәтеп һөҙгәс, 15 грамм бал, 1 балғалаҡ лимон һуты өҫтәп эсергә.

## Миләш сәйе

30 грамм киптерелгән миләш, 5 грамм ҡурай еләген ваҡлап, 2 грамм ҡарағат япрағын ҡушып, фарфор сәйгүндә бешереп, эсергә.

Һалҡын, киҙеү тейгәндә түбәндәге сәйҙәр ярҙам итә.

## Йүкә сәйе

Йүкә сәскәләренә ҡайнар һыу ҡойоп, 10-15 минут төнәткәс, һөҙөп, бал ҡушып эсергә. Бер кеше өсөн 5 грамм киптерелгән йүкә сәскәһе, 15 грамм бал, 1 стакан һыу.

## Һыуһынды ҡандырыусы сәй

1 грамм йүкә, боланут (иван-чай, кипрей), 2 грамм ҡурай еләге япрағын 1 стакан ҡайнар һыу менән сәйгүндә бешекләгәс, 10-12 минут тотоп, 15 грамм бал ҡушып эсергә.

## Тән температураһы юғары булғанда сәй

1-әр ҡалаҡ ҡурай еләге, ҡара ҡарағат, 1 балғалаҡ һырғанаҡ емешен иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-әр балғалаҡ лимон һуты, бал ҡушып болғатҡас, емештәре менән бергә бөткәнсе эсергә. Көнөнә бер нисә тапҡыр тән температураһы төшкәнсе эсергә. Киптерелгән, туңдырылған емештәр ҙә ярай.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ *Әйтәйек, 25 декабрҙән 5 февралгә тиклемге ваҡыт башҡорттарҙа селлә тип атала. Әгәр ҙә селлә осоронда йылы торһа, йәки ямғыр яуһа, йәйге селләлә, ә ул 25 июндән 5 авгусҡа тиклем, һыуыҡ һәм ямғырлы була.*




# ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Ҡул өсөн ҡағиҙәләр

● Күрешер өсөн кешегә уң ҡулығыҙҙы һуҙығыҙ.

● Хоҡуғығыҙ булмаған нәмәләргә һис бер ваҡыт ҡул һуҙмағыҙ һәм кешеләргә лә бирмәгеҙ. Шуны асыҡ белегеҙ: мосолман кешенең ҡулынан һәм теленән мосолмандарға сәләмәтлек килә.

● Кешеләр алдында ҡулығыҙ менән уйнамағыҙ, бармаҡтарығыҙҙы шыртлатмағыҙ, аралаштырмағыҙ, тырнаҡтарығыҙҙы киҫмәгеҙ.

● Ситтән бер кешене саҡырырға булһағыҙ, ҡулығыҙҙы болғап саҡырмағыҙ. Кешеләрҙе тынысһыҙламаҫлыҡ әкрен тауыш менән саҡырығыҙ.

● Бысраҡ нәмә тотҡандан йәки ашағандан һуң ҡулығыҙҙы матурлап йыуығыҙ. Йыуынғанда кейемегеҙҙе еүешләмәгеҙ. Ҡулығыҙҙы яҡшылап һөртөгөҙ.

● Тырнағығыҙҙы оҙон итеп йөрөтмәгеҙ, аҫтындағы керҙәрен таҙартығыҙ.

## Баш өсөн ҡағиҙәләр

● Башығыҙҙы юғары күтәреп, түбән һалып йәки бер яҡҡа бороп йөрөргә ғәҙәтләнмәгеҙ. Уҡығанда, яҙғанда ҡулығыҙ менән эйәгегеҙгә таянмағыҙ. Халыҡ алдында башығыҙҙы һәм башҡа ағзаларығыҙҙы тырнамағыҙ.

● Халыҡ алдында яланбаш булмағыҙ. Аулаҡта башығыҙ асыҡ ултырған хәлдә кеше килеп керһә, кәләпүштәрегеҙҙе кейегеҙ, башығыҙҙы ҡаплағыҙ.

● Йәй көндәре сәсегеҙҙе мөмкин тиклем ҡыҫҡа йөрөтөгөҙ. Уларҙы һәр ваҡыт һабын менән йыуығыҙ. Эҫе көндәрҙә ҡат-ҡат йыуығыҙ.

● Башығыҙҙы йыуғандан йәки ғөсөл ҡылғандан һуң яланбаш һалҡын һауаға сыҡмағыҙ.

## Ғөсөл ҡағиҙәләре

● Ғөсөл ҡылғанда тәнегеҙҙе яҡшылап ҡоротоғоҙ һәм тиҙерәк кейемегеҙҙе кейегеҙ йәки ятып тәнегеҙҙе йылытығыҙ. Өшөгән, тирләгән ваҡыттарҙан тыш, башҡа ваҡыттарҙа һалҡынығыраҡ һыу менән ғөсөл ҡылығыҙ.

● Һалҡын һыу менән ғөсөл ҡылғанда бер минуттан артыҡ йыуынмағыҙ һәм тәнегеҙҙе ҡаты йыумағыҙ. Йомшаҡ ҡына йыуынығыҙ, тәнегеҙҙе һөртмәй, кейем менән бөркәнеп ятығыҙ, һуңынан аҙыраҡ йөрөгөҙ, йәки тәнегеҙҙе ҡыҙҙырғансы хәрәкәтләнегеҙ. Быларҙы эшләмәһәгеҙ, тәнегеҙ тулыһынса ҡороғанға тиклем ябынып ятып тороғоҙ.

## Йөрөү ҡағиҙәләре

● Йөрөгәндә тәнегеҙҙе тура һәм төҙ тотоғоҙ. Кәрәкмәгәндә артыҡ ашығып йә яйлап йөрөмәгеҙ, ә ғәҙәттәгесә йөрөгөҙ.

● Ҡалала йөрөгәндә урам уртаһынан түгел, юл ситенән йөрөгөҙ, ҡаршы килеүселәр булһа, уң тарафтан үтегеҙ, артығыҙға, тирә-яҡтарға ҡарап йөрөмәгеҙ. Был ахмаҡлыҡтың билдәһе. Күҙегеҙ алға ҡараһын.

● Кәрәкмәһә, туҡтап тормағыҙ, ҡаршы килгәндәргә текләп ҡарамағыҙ, уларға ҡағылмағыҙ. Ҡапыл ҡыҫтаулыҡ була ҡалһа, уң яҡта туҡтап, иркенәйгәнде көтөгөҙ.

● Зәғиф һәм көсһөҙҙәргә осратҡанда ҡулығыҙҙан килгәнсе ярҙамдан мәхрүм итмәгеҙ. Ауыр әйберҙәр күтәреп килеүселәргә юл бирегеҙ.

● Ҡысҡырышыусы дәғүәләшеүселәр осрағанда араларына ҡыҫылмағыҙ, бер яҡтан урап үтегеҙ.

*ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ*

**Ауылдарҙа тәбиғәт күренештәрен, һауа торошон күҙәтеп, уның үҙгәрештәрен теркәп, баһалама биреп барыусылар була. Уларҙы фенолог тип атайҙар. Фенология үҫемлек һәм хайуандар донъяһының миҙгел күренештәрен, шулай уҡ ҡар ятыу һәм ирeү ваҡытын, тәүге һәм һуңғы ҡырауҙарҙы, йылғаларҙы боҙ ҡаплау һәм һыу ҡайтыуҙы өйрәнә, теркәй. Бына шундайҙарҙың береһе Ейәнсура районы Бикберҙе ауылында йәшәүсе Ҡасим ЯНБАЕВ. Ул фенолог яҙмаларын 1976 йылдың 30 мартынан башлап алып бара.**



# ҠЫШТЫҢ ҺЫУЫҠЛЫҒЫН...

## ҡарабаш турғайға ҡарап бел

- Бындай яҙмалар алып барыу үҙемә лә ҡыҙыҡлы, унан һуң бер йылды икенсеһе менән сағыштырыу өсөн дә кәрәк, - тип һөйләп китте беҙгә Ҡасим ағай. - Мин унда һауа торошон ғына теркәп ҡалмайым, ә йылдың иҫтәлекле ваҡиғаларын, уңыш күрһәткестәрен, тәбиғәт үҙенсәлектәрен дә яҙып, ҡылыҡһырлама биреп барам. Шуға ла ул үҙенә күрә бер тарихи көндәлек тә һымаҡ. Элек градусниктар булмаған, әммә һауа температураһын ҡайһы бер үҙенсәлекле күренештәр менән билдәләгәндәр. Шуларҙың бер нисә миҫалын килтереп китәм. Ҡарабаш турғай осмай икән, тимәк, тышта 40 градустан түбән температура. Бала саҡта ҡураға мал-тыуар ҡарарға сыҡһаң, унда ҡарабаш турғайҙар йыйылған була. Беҙ уны ҡыуып осороп ебәрәбеҙ. Бер нисә секунд үтеүе була, теге осоп барған еренән ҡолап төшә. Баҡтиһәң, ҡаты һыуыҡтарҙа ҡарабаш турғай осһа, 25-30 секундта боҙға әйләнә икән.

Атайым мәрхүм өйрәтеүенсә, ҡыштың һалҡынлығын алыҫҡа ҡарай төкөрөп ҡарап та белергә мөмкин. Әгәр төкөрөк боҙлауыҡҡа әүерелеп, ҡарға сәнселеп барып төшә икән, тимәк, һауа температураһы 40 градустан түбән.

Тағы ла 1939-1940 йылдарҙа булып үткән бер ваҡиға хәтергә төштө. Беҙҙән өс өй аша бәләкәй генә магазин була торғайны. Тышта ғинуар айы. Теге магазин яғына күпләп ирҙәр ағылғас, ҡыҙыҡһындым. Баҡтиһәң, магазиндың мейесе булмағас, араҡылар туңған, шуны тышҡа сығарып ташлаған булғандар. Тимәк, араҡы туңғас, температура 40 градустан түбән булған. Һуңғы ваҡытта беҙҙә ундай һыуыҡтар булғаны юҡ. Хәҙер йәйҙәр ҙә башҡаса бит. Бала саҡта ҡапыл болоттар килеп сығыр ҙа, күк дөһөрләп, шабырлап ямғыр яуып үтеп китер, артынан ҡояш сығып, йылытып ебәрер ине. Беҙ, балалар, урамдағы күләүектәрҙе кисеп, һыу сәсрәтеп уйнар инек. Хәҙер ундай тәбиғәт күренештәре булғаны юҡ. Мин ҡышҡы айҙарҙы йәй айы менән сағыштырам. Әйтәйек, 25 декабрҙән 5 февралгә тиклемге ваҡыт башҡорттарҙа селлә тип атала. Әгәр ҙә селлә осоронда йылы торһа, йәки ямғыр яуһа, йәйге селләлә, ә ул 25 июндән 5 авгусҡа тиклем, һыуыҡ һәм ямғырлы була. Күҙәтеүҙәр буйынса йыш осраҡта был сағыштырыу тура килә. Ә бына ни ҡар ятмай, ни туңдырмай, аҫта бысраҡ, еүеш булып торған ваҡытты әшкәтәү тип атайҙар.

Мин элек һауа торошон сәғәт көндөҙгө 12-лә һәм кисен 11-ҙә генә билдәләһәм, хәҙер өс ваҡыт: иртәнге, көндөҙгө һәм киске температураны яҙып барам. 1986 йыл - Ағас юлбарыҫ йылында декабрҙә иң һыуыҡ көн -19 градус булған. Ғинуар айында - 24 градустан түбән төшмәһә, февраль айында иһә -30 градус һыуыҡтар күҙәтелгән. Тәүге ҡар алдағы йылдың 18 октябрендә яуған. Уҙып барған 2009 йылда иһә 13 ғинуарҙа -29 градус, 10 февралдә -23 градус булған. 2008 йылдың 6 ноябрендә ҡар яҡкан. Беҙҙә ҡар кәртәләрҙе күмһә, йәғни 1,40 сантиметр тирәһе яуһа, был уртаса норма иҫәпләнә. Ә үткән йыл ҡыш ҡарһыҙ килде, 30 сантиметр тирәһе генә ҡалынлыҡта ҡар булды.

Мин һәр йылға ҡарата күпме уңыш йыйып алынғанын теркәп барам. Әйтәйек, 2008 йыл Сысҡан йылында Башҡортостанда - 5 млн 100 мең тонна, Рәсәйҙә 108 млн тонна уңыш йыйып алынған. Картуфҡа килгәндә, мин үҙем 125 күнәк уңыш алдым. 2009 йыл Ҡуңыр буға йылын алһаҡ, Башҡортостанда - 3 млн 200 мең, Рәсәйҙә 90 млн тонна иген һалынған. Ә картуфты мин ҡоролоҡ булыуына ҡарамаҫтан, яҡшы дым менән тәьмин иткәс, 150 күнәк алдым. Быйыл бал ҡортоноң бер ғаиләһе 27 кг бал бирҙе.

Йәнлектәр донъяһына бер аҙ күҙ һалып киткәндә, ҡор, һуйыр, ҡуян ныҡ аҙайҙы, шунын менән бергә бүре, айыу ҙа кәмене. Уның ҡарауы, төлкө артты. Үткән йыл имән сәтләүеге күп булғас, ҡабан сусҡаһы күбәйҙе. Ҡондоҙ ҙа күп хәҙер. Был үҙгәрештәр, әлбиттә, күпселек экологияға, баҫыуҙарҙа иген сәселмәүенә бәйле.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ҡасим олатайҙың һөнәрҙәре бик күп. Ундай кешеләр тураһында, ғәҙәттә, алтын ҡуллы, тиҙәр. Умартасылыҡ, һунарсылыҡ менән шөғөлләнеүҙән тыш, төрлө йәнлек, ҡош кәүҙәләренән ҡурҡылыҡтар эшләй, ағастан уйып әйберҙәр яһай. Үҙенә күрә ҡыҙыҡһыныуҙары ла бар. Мәҫәлән, ул халыҡ әйтемдәрен, мәҡәлдәрен йыя, һирәк яңғыраған исемдәрҙе яҙып бара. Тыуған төйәгенең тарихын яҡшы белгән, халҡы яҙмышына битараф булмаған Ҡасим олатайҙың йортонан бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәй. Ауылдаштары араһында ғына түгел, райондаштары араһында ла оло ихтирам яулаған олатайҙан барыһы ла кәңәшен дә, ярҙамын да һорап килә, уның менән фекер уртаҡлаша.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

*ЙОНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...*

# ЭСТӘН ҠУЯН КЕҮЕКМЕН

Был юрау, ышаныуҙарҙың тап килеү-килмәүе кешенең уны нисек ҡабул итеүенән дә киләлер. Ер йөҙөндәге бөтә кешене 12 йондоҙлоҡҡа, 12 йәнлеккә бүлеп, уларға 12 төрлө характер билдәләп, бөтәһен дә бер епкә теҙеп ҡарауҙары менән, бер яҡтан, килешеп тә етмәйем. Һәр кеше үҙенсәлекле, һәр береһенең үҙенә генә хас холҡо, уй-хыялдары, маҡсаты бар. Мин класс етәксеһемен. Уҡыусыларым үҙемдән 12 йәшкә бәләкәй. Улар ҙа юлбарыҫтар булып сыҡты. Һәр уҡыусының уй-кисерештәре, хыялдары, маҡсаттары төрлөсә. Барыһы ла балҡып уҡ тормаһа ла, һәр береһенән йондоҙ яһарға тырышабыҙ. Шуға күрә, йондоҙнамәләргә тулыһынса ышанып, тормошоңдо уның буйынса ғына ҡороу килешкән эш түгел.

Ә шулай ҙа... Ҡайһы саҡ шул ырым-юрауҙар тап килеп тә ҡуя кеүек. Мине яҡшы белгән кешеләр минең турала маҡсатҡа ынтылыусан, талапсан, ниндәйҙер кимәлдә уҫал, тип әйтәләр. Таныш бер инәйем миңә хатта "Һин танк һымаҡ", тип тә әйтеп ҡуйғайны, йәнәһе, нимәнелер алдыма алһам, борола белмәйем. Ысынлап та, мин яҡын кешеләремә лә, үҙемә лә артыҡ ныҡ талапсан, алдыма ҡуйған маҡсатыма ынтылам һәм унан сигенмәйем. Йәнлеккә килгәндә, "йыртҡыслығым" да бар былай. Шулай ҙа сит кеше өсөн яуыз, көслө юлбарыҫ кеүек күренһәм дә, эстән мин үҙемде ҡуян, тип иҫәпләйем.

***Рәсимә АЛТЫНБАЕВА,***
***Бөрйән районы Байназар мәктәбенең инглиз теле уҡытыусыһы.***

ТАРИХҠА ЯҢЫ ҠАРАШ

# БАШҠОРТ ҠЫШ БАБАЙЫ...

## суфый ул

**Ысынлап та, башҡорт Ҡыш бабайы булғанмы, бармы? Юҡ, тип әйтер берәү, сөнки мосолмандарҙа элек Яңы йылды 31 декабрҙә ҡаршылау йолаһы ла булмаған. Йолаһы булмағас, уның Ҡыш бабайы ла булмаған. Был йәһәттән беҙ христиандарға эйәреп, Ғайса бәйғәмбәрҙең тыуған йылы буйынса Яңы йылды ҡаршыларға өйрәнгәнбеҙ. Шулай ҙа милләтебеҙ тормошонда сихри көскә эйә, балаларға серле, мөғжизәле мәлдәр бүләк итеүсе кешеләр булған бит. Улар - сәсәндәр, йырауҙар, ҡанбабалар, ҡаңбабалар, ҡанбикәләр, ҡанбикәләр, хәлфәләр, имсе-бағымсылар һ.б. Шундайҙарҙың берәүҙәре - XIX-XX быуаттар арауығында тәүгеләренең вазифаларын башҡарыусы суфыйҙар. Ни өсөн уларҙы Ҡыш бабайға тиңләргә була, тиһегеҙме? Аңлатып ҡарайым, булмаһа. Быны өсөн иң тәүҙә, әлбиттә, сабый, бала сағыма барып урайым.**

### Беҙ уларға "рикша" булдыҡ...

Бала сағымда беҙҙең яҡта алама кейемле берәҙәк ҡарттар күп йөрөй торғайны. Беҙ уларҙы, ололарға эйәреп, "суфыйҙар" тип атап йөрөттөк. Исемдәре лә сала-сарпы ғына хәтергә һеңгән: Шаһишәрип, Диуана, "Һуҡыр суфый", һ.б. Беҙҙең ауылға ла бик йыш килә ине ул суфый аталмыш бәндәләр. Мөхлис, Сәйәх, Салих олатайҙарға килә ине улар. Улар ауылдың осонда күренеүе була, иң тәүҙә эттәр абалап сыға. Беҙ ҙә: "Диуана килә, Диуана, Һуҡыр суфый, Шәйшәрип килә", - тип шул яҡҡа эркеләбеҙ. Ҡайһыларыбыҙ оло мәрәкәгә тамаша ҡыла, бәғзеләребеҙ эттәргә ҡушылып, ауылыбыҙҙың тыныслығын емереүсе ҡараҫҡыны нисек булһа ла урамға индермәҫкә тырышабыҙ, кәзекләйбеҙ, йүгереп барып, "суфыйҙың" салғыйынан тартып китәбеҙ йә урталыҡтағы йән әйәһенә ваҡ таш атабыҙ. Ҡамауҙа ҡалған теге бәндә беҙгә тәүҙә йылмайып, ниндәйҙер мәрәкә ҡылырға теләгән кеше кеүек ҡарай, беҙ уның һайын тегене эләкләйбеҙ, теге тағы ла беҙгә йылмайыулы ишара ташлай. Беҙ һаман да ыҡҡа килмәйбеҙ. Шунан һуң ҡунағыбыҙ ҡулындағы таяғын алға һоноп, зыр әйләнеп китә лә, икенсе ҡулы менән беҙҙең тарафҡа кәнфиттәр ырғыта. Ул саҡтар ауылда иң тәмле ашамлыҡ шаҡмаҡ шәкәр һаналған ваҡыт, беҙ кемуҙарҙан кәнфиттәргә йомолабыҙ. Суфый тигәнебеҙ ошо мәлде файҙаланып, ауыл урамына үтеп тә китә. Ошо саҡ ҡулына кәнфит эләктереп өлгөрмәгән өлөшһөҙ ҡалған арабыҙҙағы берәү: "Суфый был кәнфиттәрҙе осоҡлаған, ташлағыҙ, ашамағыҙ",- тип әйтеүе була, кәнфиттәр тағы ла ергә оса. Ошо мәлде файҙаланған "өлөшһөҙ бәндә" кәнфиттәрҙе йыйып алып, беҙҙе кәкере ҡайынға һөйкәлдерә.

Шуларға оҡшаған Муса тигән олатай ҙа килә торғайны беҙҙең ауылға. Баҡтиһәң, ул беҙҙең ауылда тыуып үҫкән икән. Ул йышыраҡ ҡыш килер ине. Шуныһы иҫтә ҡалған: беҙ Муса олатайға "ылаусы" булып яллана инек. Һиндостандағы "таксистар" - рикшалар кеүек була инде. Олатай теге йәки был өйҙә ҡунаҡ була ла, йорттан сығыуы була, беҙ кемуҙарҙан талашып, уны үҙебеҙҙең санаға ултыртырға тырышабыҙ. Санабыҙға яҫтыҡ та һалабыҙ. Кемебеҙгә бәхет йылмая, шуға Муса олатайҙың кеҫәһенән сыҡҡан тәмләләрҙән-тәмле "яҫтыҡ" кәнфит эләгә. Олатай башҡаларҙы ла өлөшһөҙ ҡалдырмай, санала ултырып барған еренән ергә кәнфит ырғыта. Шунан һуң "рикша" олатай әйткән кешеләрҙең өйөнә елдерә. Аталған өйҙә ҡунаҡ булып сыҡҡансы, тағы ла бер нисә ылау көтөп торабыҙ. Суфый беҙҙең ауылда бер нисә көн ҡунаҡ була ла, аҙаҡ өлөшөнә бәхет төшкән "рикша" уны күршеләге Сынғыҙ йә Ямаш ауылдарына алып китә. Унда инде ул ауылдың үҙ ылаусылары беҙҙән эстафетаны ҡабул итеп ала һәм беҙҙең эште дауам итә.

### Бала шатлығы

Үткән йәйҙә Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла райондары буйлап йөрөгәндә үҙемсә ҡыҙыҡ ҡына тәжрибә үткәреп ҡараным. Машинамдың кабинаһына күп итеп кәнфит һалып алдым да, ошо райондарҙың ауылдары янынан үткән саҡта өйәләшеп уйнаған бала-сағаларҙың янында машинамды әкренәйтеп, тегеләргә услап-услап кәнфит һибеп йөрөнөм. Балаларҙың ерҙәге кәнфиткә ябырылғанын күргәс тә, суфыйҙарға бәйле үҙемдең баласаҡ ваҡиғалары иҫкә килеп төштө. Беҙ ҙә тап шулай итеп йүгерә инек. Тағы ла шуныһы: ошо кинәнесле хәтирәләр кисергән көндәрҙә барлыҡ эштәремдең тик уңы ғына килеп торҙо, йәғни йәйем бик уңышлы үтте. Нисек кенә булмаһын, быларҙың барыһын да мин кәнфит алып ҡыуанған балаларҙың шатлығына бәйләйем. Тимәк, теге саҡта ла суфый тип аталмыш бәндәләр беҙҙе ҡыуандырып, үҙҙәренә лә кинәнес алып йөрөгән булып сыға түгелме? Юҡҡа ғына кешегә теләк теләгәндә: "Балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең ҡыуанысын күреп йәшә", - тип әйтмәйҙәрҙер. Тимәк, сабыйҙы, баланы ҡыуандырыу, шатлыҡ атына атландырыу Аллаһы Тәғәлә алдында иң сауаплы, рәхмәткә торошло ғәмәлгә тиң була түгелме? Донъяла сабый, бала шатлығынан да ҡөҙрәтлерәк, сафыраҡ көс бармы һуң? Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, Яңы йыл көндәрендә иңбашына тоғон аҫып йөрөгән Ҡыш бабайҙар ҙа шул уҡ ғәмәлде башҡара. Уларҙың тик исемдәре генә төрлөсә атала, әммә маҡсаттары, тәғәйенләнештәре бер үк түгелме?

### Мөғжизәгә ышаныу ихтыяжы

Хәҙерге ваҡытта балаларға кәнфит һибеп йөрөүсе суфыйҙар юҡ. Әле килеп аңлауыбыҙса, ул кешеләр Зәйнулла Рәсүлев, Ғабдулла Сәиди кеүек атаҡлы ишандар аҫҡан мәҙрәсәләрҙә белем алып, заман афәттәренән ҙур мөғжизә менән генә иҫән ҡалыусы һуңғы суфыйҙар булған икән дә. Һуңғы суфыйҙар әхирәткә күсеп бөттө һәм сабыйҙарҙың, балаларҙың мөғжизәгә, хикмәткә ышаныу һыуһынын хәҙер инде Ҡыш бабайҙар ҡандыра. "Ҡыш бабай яуыз булмай" тигән аңлау бар һәр беребеҙҙә. Икенсе бер мәсьәлә: мосолман, бигерәк тә башҡорт балалары нисек итеп Ҡыш бабайҙы мөғжизәнең үҙе кеүек ҡабул итә алды һуң? Ни өсөн тигәндә, Ҡыш бабайҙың эшмәкәрлеге бер ниндәй ҙә сәйәсәткә, ижтимағи ҡоролош ҡанундарына буйһондоролмай, мөғжизәнең үҙе булып ҡабул ителә. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки Ҡыш бабай образы ҡасандыр халҡыбыҙ тормошонон, балалар күңеленең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып, замандар үҙгәргәс, шунда барлыҡҡа килгән бушлыҡты тултырыусы ғыналыр. Һәр бер сабыйға, үҫмергә, өлкән кешегә, милләткә мөғжизәгә ышаныу, шуның аша киләсәккә өмөтләнеп йәшәү ҡиммәте Хоҙай, тәбиғәт тарафынан һалына бит. Ә инде суфыйҙар, Ҡыш бабайҙар һәм башҡалар кешенең ана шул ихтыяжын тормошҡа ашырыусылар ғына. Был, әлбиттә, минең генә фекерҙәрем. Кем нисек уйлай? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта ла фекер алышайыҡ буғатабыҙға 2010 йыл баҫҡанда.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**



ЙЫЛ УҢЫШЫ

## ЙӘШЕЛ ЮЛ ТЕЛӘЙЕМ...

**Үтеп барған йыл минең өсөн бик уңышлы булды. Балаларым да шатландырып ҡына торҙо, бер улым яныма эшкә килде, кесеһе Ырымбурҙа университет тамамланы. Тағы ла бер автомәктәп асыуға өлгәштем, кабинеттарҙы яңырттыҡ, машиналар паркын тулыландырабыҙ, тәжрибәле уҡытыусылар йыйҙыҡ - былар барыһы ла конкуренцияға һәләтлелекте арттыра.**

Күрсәк, тиһәк тә, халыҡ хәҙер күпкә яҡшыраҡ йәшәй, автомәктәпкә уҡырға килеүселәр һаны ла арта. Мин водителдәрҙе ир-атҡа йә ҡатын-ҡыҙға, йәшкә йә ҡартҡа, йәки милләтенә бүлеп ҡарамайым, улар араһында юл ҡағиҙәләрен боҙоусылар һәм боҙмаусылар ғына бар. Ҡабаланып, үҙеңдең йә башҡа кешенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуҙан һаҡланығыҙ, тип теләр инем мин. Яңы йылда бар машина йөрөтөүселәргә лә йәшел юл теләйем!

**Хәлим ӘЙҮПОВ, Өфөлә бер нисә автомәктәп асҡан эшҡыуар.**

## ЮРИСТ БУЛАСАҠМЫН...

**Көньяҡ Кореяның баш ҡалаһы Сеулда уҙғарылған кунг-фу буйынса XXII Донъя кубогында донъя чемпионы исемен яулауым быйылғы йылдың ғына түгел, ә 5 йәшемдә ҡул һуғышы менән шөғөлләнә башлаған мәлемдән алып бөгөнгә көнгә тиклемге ваҡытты үҙ эсенә алған осорҙоң да оло уңышы, тип баһалайым.**

Был еңеүҙән һуң үҙ-үҙемә ышанысым тағы ла артты, алдыма ҡуйған маҡсаттарға еңелерәк ирешә башланым. Яңыраҡ үҙем шөғөлләнгән "Кара аждаһа" клубы спортсылары менән Өфө ҡалаһында үткән Көнсығыш көрәш төрҙәре буйынса XV асыҡ республика фестивалендә ҡатнаштыҡ. Шулай ҙа хәҙер буш ваҡытымды уҡыуға бағышларға тырышам, XI синыф уҡыусыһы булараҡ, бөгөн Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеү менән мәшғүлмен. Мәктәпте тамамлағас, юрист һөнәрен үҙләштерергә теләйем.

**Иҙел УРАҘГИЛДИН, Сибай спортсыһы.**

## КРИЗИСТА ЛА КЕМДЕР УҢА

**Быйылғы йылым бүтән йылдарға ҡарағанда уңышлы булды. Үҙемдең "Башринкон" тигән төҙөлөш фирмамды асып, ошо өс йыллыҡ эшләү дәүеренең яҡшы һөҙөмтәһен күрергә насип булды. Кризис тиҙәр, әммә унда ла, ҡайһы берәүҙәр әйтмешләй, кемдер туныра, ә кемдер уңырға мөмкин. Ә мин уңдым.**

Финанс яғынан ҡарағанда, өс тапҡыр артығыраҡ эш башҡарҙыҡ һәм килемен дә алдыҡ. Кризистан ҡурҡырға ярамай. Ул ил күләмендә, бәлки, барҙыр, әммә тырыш кеше үҙ эшендә барыбер ҙә еңеп сыға ала. Быйыл мин үҙем өсөн шуны рәсланым. Һәр ваҡытта ла шыма ғына бармай эш, ҡайһы саҡта боҙло һыуға һикереп, тәүәккәллек тә күрһәтергә тура килә. Ғөмүмән, эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшер өсөн эшлекле, уңған, айыҡ аҡыллы булырға кәрәк. Бик яҡшы ышаныслы команда туплағанмын. Эштә минең өсөн иң мөһиме - тәртип һәм яуаплылыҡ. Һәм тағы: миндә эшкән кешеләр эшләмәй - был мин ҡуйған төп талаптарҙың береһе. Үҙ сиратымда, мин эшселәремә үҙ ваҡытында лайыҡлы эш хаҡы түләйем.

Быйыл тыуған яғым Ейәнсура районы Кинйәбулат ауылында мәхәллә астым. Унда мәсет төҙөргә уйлайым. Ошондай изге уйҙарҙа йөрөүем дә эшемдә уңыш ҡаҙаныйрға ярҙам итәлер. Әсәйем мәрхүмә: "Аллаһтан һорарға кәрәк, һорағандарға бирә ул," - ти торғайны. Әммә был осраҡта ла уйыңдың изге булыуы һәм уны тормошҡа ашырыр өсөн сәбәп ҡылырға, хәләл көсөңдө түгергә кәрәк, шул саҡта ғына Аллаһ рәхмәтенә өлгәшергә мөмкиндер.

**Фуат БАЙСУРИН, "Башринкон" ойошмаһы директоры.**

*✓ Өләсәйебеҙ йоғонтоһонда беҙҙә үҙ-үҙебеҙҙе танып белергә ынтылыу тойғоһо көслө булды. Үҙ-үҙен ныҡлап белмәгән кеше үҙенә ниндәй һөнәр, кемде кәләш итеп һайларға кәрәк икәнлеген дә белмәй бит хатта.*

# БЕҘ - ЮЛБАРЫҪ Арыҫландың

**Халҡыбыҙҙағы Арыҫлан, Юлбарыҫ исемдәренең тамырын юллай башлаһаң, кәмендә Урал батырыбыҙ арыҫлан менеп йөрөгән боронғо дәүерҙәргә барып сығырға мөмкин булыр ине. Ысынлап та, беҙҙә бындай исемдәр булғас, исемдәрҙең есемдәре лә уларҙы аңлатҡан йәнлектәргә һәм мотлаҡ рәүештә үҙебеҙҙең ерлеккә барып тоташҡаны көн кеүек асыҡ бит. Арыҫлан, Юлбарыҫ исемдәре беҙгә Һиндостандан йә Африканан каруан дөйәләренә артмаҡланып килмәгән бит инде. Бөгөн, мәҫәлән, беҙҙең халыҡта Арыҫлан исемле ир-аттар, Арыҫланов фамилиялы кешеләр осрай. Арыҫландан килеп сыҡҡан Руслан, Рөстәм исемдәре лә бар. Юлбарыҫ исеме осрамаһа ла, Юлбарыҫов фамилиялы кешеләр бихисап. Еребеҙгә 2010 - Юлбарыҫ йылы аяҡ баҫҡанда беҙ шул фамилияны ғорур йөрөткән милләттәштәребеҙ менән һеҙҙе яҡындан таныштырырға булдыҡ. Улар - ағалы-ҡустылы Салауат һәм Марс Юлбарыҫовтар. Салауат - танылған журналист, оҙаҡ йылдар Ырымбур өлкә матбуғатында хәбәрсе булып эшләгән, һуңғы йылдарҙа РФ Дәүләт Думаһы депутаты ярҙамсыһы ла булған. Бөгөн Салауат Хәбибулла улы Кинйә Арыҫланов исемендәге хәйриә фонды вице-президенты. Ҡустыһы Марс Хәбибулла улы - киң билдәле эшҡыуар, танылған башҡорт меценаты, Кинйә Арыҫланов исемендәге хәйриә фонды президенты. Кинйә Арыҫланов тигәндән, Салауат һәм Марс Юлбарыҫовтарҙың нәҫел ағасы туранан-тура данлыҡлы Кинйә Арыҫлановҡа барып тоташа. Шулай итеп, һеҙҙең иғтибарға Юлбарыҫ һәм Арыҫлан вариҫтарының Яңы йыл алды әңгәмәһен тәҡдим итәбеҙ.**

**▸ Әсәйегеҙ яғынан Арыҫлан, атайығыҙ яғынан Юлбарыҫ вариҫы булараҡ, үҙегеҙҙең ошондай үҙенсәлекле тамырлы сығышығыҙға ниндәй мәғәнә бирәһегеҙ? Был һеҙҙең өсөн яуаплылыҡмы? Өҫтөнлөкмө, әллә башҡа төрлө мәғәнәгә эйәме? Арыҫлан һәм Юлбарыҫ затынан булараҡ, үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?**

**САЛАУАТ:** Минең оло ҡыҙым алты йәш кенә сағында минән: "Беҙҙең фамилия нимәне аңлата, нимә була ул юлбарыҫ?" - тип һорағайны. Ошо атамалағы һирәк осрай торған шөһрәтле ҡыр йәнлеге барлығын, фамилиябыҙҙың шунан килеп сығыуын аңлатып биргәйнем, ҡыҙым: "Ҙурайып, кейәүгә сыҡҡас, мин был фамилиямды үҙгәртмәйем, ул миңә оҡшай", - тигәйне мине аптыратып. Ул саҡта ни, үҙем дә фамилиябыҙҙың ни өсөн фәҡәт шулай тип аталғанын, шәжәрә тигән мөғжизәнең, унда Юлбарыҫ атлы ҡартатайыбыҙ барлығын, фамилиябыҙ шунан килеп сыҡҡанын белмәй инем шул әле, 33 йыл буйына журналист булып эшләгән кеше булараҡ, был донъяла иң ҡиммәтлеһе мәғлүмәт икәнлеген яҡшы беләм. Беҙгә һәр йәһәттән мәғлүмәт етешмәй. Мәғлүмәт етешмәүе - бер нәмә, беҙ уны файҙалана ла белмәйбеҙ. Мәҫәлән, Кинйә Арыҫлан ҡартатайым мәғлүмәттең ниндәй көскә эйә булыуын бик яҡшы белгән. Улай ғына ла түгел, батша генералдары һәм ғәскәр башлыҡтары шәхестәренә ҡағылған йәшерен мәғлүмәтте тәрән белеүе арҡаһында, шул мәғлүмәтте бик оҫта файҙаланып, үҙен һәм нәҫелдәштәрен һаҡлап ҡала алған. Быларҙың барыһын да Кинйә Арыҫлан хаҡында мин әле яҙып ятҡан әҫәрҙә уҡырһығыҙ.

Арыҫлан ҡаны беҙгә ҡатынҡыҙ яғынан, Шәһәрзада өләсәйебеҙ аша бирелгән. Беҙ был хаҡта бала саҡтан ишетеп кенә белдек, әсәйебеҙҙең әсәһе - Өммөгөлсөм өләсәйебеҙ беҙҙе Кинйә ауылына алып барып та йөрөнө. Өфөгә килеп, үҙебеҙҙең шәжәрәне төҙөгәс кенә хәҡиҡәт беҙгә тулыһынса асылды. Ә инде Юлбарыҫ ҡартатайға тиклемге атайыбыҙҙың нәҫел ағасын беҙгә тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров төҙөп бирҙе. Беҙҙең Этҡол, Һатлыҡ, Кәлимулла, Юлбирҙе атлы ҡартатайҙар булған. Юлбирҙенең улы - Юлбарыҫ. Ул саҡта атайыбыҙҙың исеме фамилияға күскән, Юлбарыҫ Юлбирҙин була инде. Юлбарыҫ ҡартатайыбыҙ 1840 йылда хәҙерге Ауырғазы районының Өсбәлеш ауылында тыуған. Юлбарыҫтың улы Ғәзизулла, артабан Ғибаҙулла һәм беҙҙең атайыбыҙ Хәбибулла, унан беҙ - Салауат, Юлай, Марс тыуғанбыҙ.

**МАРС:** 2006 йылда хөкүмәтебеҙҙең махсус ҡарары нигеҙендә "Шәжәрә байрамдары" уҙғарыла башланы. Мин шәжәрәбеҙҙе төҙөргә ярҙамлашыр өсөн Ырымбурҙа йәшәгән Салауат ағайымды саҡырып алдым. Бар эштәрҙе ташлап, шәжәрәбеҙҙе төҙөргә ултырҙыҡ. Бының өсөн 3-4 ай ваҡытыбыҙ китте. Шул саҡта мәктәптә уҡыған Артур улым рефератында: "Миндә юлбарыҫ һәм арыҫлан ҡаны тибә", - тип яҙҙы.

Әнүәр Әсфәндиәровтың китабында Арыҫлан батырҙың Кинйә, Ирназар, Юлбарыҫ атлы улдары булыуы хаҡында әйтелә. Ошо факт беҙҙә күп кенә буталсыҡтарға алып килде. Нисек инде, мең-меркет ырыуынан булған Юлбарыҫ ҡыпсаҡ атайҙан тыуа инде? 2007 йылда ике яҡтан да шәжәрәне төҙөп бөткәс кенә хаталанғаныбыҙҙы аңлай башланыҡ. Ә Кинйә Арыҫлановтың Юлбарыҫ ҡустыһы халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтарҙың ҡартатаһы булып сыҡты.



*Беҙ бала саҡта киноға бара торғайныҡ. Әсәйебеҙҙән һәр ҡайһыбыҙ 5-әр тин аҡса алабыҙ. Ағайымдар киномеханиктан билет алған ике арала мин уларҙың аяҡ араһынан үтеп китәм дә, киноны ултырғыстар аҫтынан бушлай ҡарайым. Янда ҡалған аҡсаны печенье йәки башҡа төрлө тәмтом алыр өсөн тотонған, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, әлбиттә, мин ул аҡсаны кинонан ҡайтышлай дин тотоусы бер инәйгә хәйер итеп бирә торғайным.*

**▸ 1773-1775 йылғы халыҡ күтәрелешендә мөһим роль уйнаған милли юлбашсы, Салауат Юлаевтың арҡадашы Кинйә Арыҫланов һәм уның атаһы Арыҫлан хаҡында мәғлүмәт етерлек. Ә бына атайығыҙ яғынан булған Юлбарыҫ ҡартатайығыҙ ниндәйерәк кеше булған? Белешеп, эҙләп ҡарағанығыҙ булдымы?**

**САЛАУАТ:** Уны тарихи-хәрби архивтан эҙләп табырға булалыр, тип уйлайым. Юлбарыҫ ҡартатайыбыҙ мең ҡәбиләһенең меркет ырыуынан булғас, ап-аҡ йөҙлө, ҙур күҙле, асыҡ ҡарашлы кеше булғандыр, тим. Архивта Юлбарыҫ затына ҡараған ир-аттарҙың хәрби кеше булыуы хаҡындағы белешмәләр бик күп. Шуға күрә, Юлбарыҫ ҡартатайыбыҙ хәрби кеше булған, тип әлегә фараз ғына йөрөтә алабыҙ. Сыңғыҙхандың ҡотон алған меркет затынан булһын да, нисек хәрби булмаһын инде! Уның нисек булыуы хаҡында беҙ хатта үҙ атайыбыҙҙан сығып ҡына ла фекер йөрөтә алабыҙ.

**МАРС:** Атайыбыҙ Хәбибулла 34 йәшендә генә үлеп киткәс, беҙҙе әсәйебеҙ тәрбиәләп үҫтерҙе. Атайымдың тыуған ауылына, үкенескә ҡаршы, мин 2006 йылда ғына бара алдым. Ололарҙан һорашып, атайыбыҙҙың, уның янындағы Ғибаҙулла, Ғәзизулла ҡартатайҙарыбыҙҙың, Мәҙинә өләсәйебеҙҙең ҡәберен таптыҡ. Логика буйынса Юлбарыҫ ҡартатайыбыҙ ҙа шунда ерләнгән булырға тейеш, тип уйланыҡ та, мәрмәрҙән дүрт ҡәбер ташы ултырттыҡ. Бер юлы бетондан бағаналарға, тимерҙән ҡоймаға заказдар биреп, зыяратты ла яҡшылап кәртәләп ҡуйҙыҡ. Үткән йыл Өсбәлештә элек колхоз рәйесе булып эшләүсе, хәҙер Ауырғазы районы хакимиәте башлығы Марат Ишемғоловтың инициативаһы менән район тарихында тәүге тапҡыр "Шәжәрә байрамы" һәм "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" саралары үтте. Байрамға әҙерләнгәндә мин ауыл халҡына матди ярҙам күрһәтергә тәҡдим итеп ҡарағайным: "Юҡ, үҙебеҙҙең өйөбөҙҙө үҙебеҙҙең аҡсаға, үҙебеҙҙең көс менән рәткә килтерәбеҙ", - тип ярҙамдан ҡырҡа баш тарттылар. Республика буйлап күп йөрөргә, төрлө ауылдарға ярҙам итергә тура килә, шуға күрә мин ҡайҙа ниндәй халыҡ йәшәгәнен яҡшы беләм һәм атайымдың ауылдаштарына ҡарата күңелемдә ихтирам, ғорурлыҡ тойғоһо уянды. Юлбарыҫ ҡартатайымды ла ошо күҙлектән ниндәйерәк кеше булғанын төҫмөрләргә була бит. Ғорур, мәртәбәле, үҙ бәҫен белгән халыҡ йәшәй Өсбәлештә, улар бер ваҡытта ла кешегә һалының йәшәмәй, барыһын да үҙ ҡулы менән эшләргә ярата.

**▸ Тамырҙарығыҙ Ауырғазы һәм Көйөргәҙе райондарынан булһа ла, һеҙ Ырымбур өлкәһенең Төйләгән районында тыуып үҫеп, быуын нығытҡанһығыҙ. Төп йортобоҙҙан - Башҡортостандан айырылып йәшәүҙе нисек кисерҙегеҙ?**

**МАРС:** Беҙ күберәк Өммөгөлсөм өләсәйебеҙ (нәнәйебеҙ) йоғонтоһонда булдыҡ. Беҙ йәшәгән ауылда урыҫы ла, сыуашы ла, муҡшыһы ла булды, башҡорттар 3-4 ғаилә генә инек. Шуға күрә ул беҙгә талапты: "Урамда - урыҫса, өйҙә башҡортса һөйләшегеҙ", - тип бик ҡаты итеп ҡуйҙы. Өләсәйебеҙ йоғонтоһонда беҙҙә үҙ-үҙебеҙҙе танып белергә ынтылыу тойғоһо көслө булды. Үҙ-үҙен ныҡлап белмәгән, аңламаған кеше үҙенә ниндәй һөнәр, кемде кәләш итеп һайларға кәрәк икәнлеген дә белмәй бит хатта. Беҙ Башҡортостанды, милли мөхитте, үҙ асылыбыҙҙағы тормошто ныҡ һағына торғайныҡ. Ул тойғоноң ни тиклем көслө булғанлығын, нимәгә ынтылып йәшәгәнебеҙҙе әле Башҡортостанда йәшәй башлағас ҡына ныҡлап аңлайбыҙ. Атайымдың әсәһе Күмертауҙа йәшәне. Өләсәйемдең хәлен белергә әсәйем мине Күмертауға ебәрә торғайны. Шул ваҡытта Күмертау урамында, автобуста башҡортса һөйләшкән кешеләрҙе күреү һәм ишетеү миңә оло байрамдай тойола торғайны.

**САЛАУАТ:** Дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә үҙ асылыбыҙҙы һаҡлап йәшәү бик еңелдән булманы. Беҙгә бик ауыр ҡабул ителгән "нацмен" һүҙен әйтәләр ине. Бер мәл бер милиционер өс ағайҙың эргәһенә килеп: "Ниңә башҡортса һөйләшәһегеҙ?" - тип бәйләнгәйне. Шул күренеш ғүмеремә күңелемә уйылып ҡалды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙа тырмашыу, кеше булырға ынтылыу тойғоһо республикала йәшәгән башҡорттарға ҡарағанда көслөрәк барыбер. Бер мәл Төйләгән районы ауылдарының урта мәктәпте тамамлаусылар араһында кемдең күберәк юғары уҡыу йортона уҡырға ингәнен махсус рәүештә тикшереп ҡараным. Иң күбе Аллабирҙе, Мәҡсүт ауылы мәктәптәрен тамамлаған башҡорт балалары булып сыҡты. Бына бит нисек.

Ауылда йәшәгән урыҫтар, сыуаштар, муҡшылар араһында беҙҙең ғаилә "особенный" булды, тип әйтһәм дә, хата булмаҫ. Мең-меркет ырыуына ҡараған атайыбыҙҙың ҡушаматы асылына күрә "кипяток" булған. Ҡыҙыу ҡанлы булғас, унан ҡурҡҡандар ҙа, егәрле һәм тырыш кеше булараҡ, ихтирам да иткәндәр. Хеҙмәттә лә ваҡланып тормаған ул, шахтала сменаһына өс норма үтәгән. Бер мәл беҙгә Мәскәүҙән күмер сәнәғәте министры килгән. Осрашыу барышында атайыбыҙ һөйләргә тип ҡул күтәргән. Тура һүҙле булыуынан ҡурҡҡан етәкселәр уның һөйләүенә ҡаршы төшкәс, атайыбыҙ: "Һеҙ мине туҡтатмағыҙ, мин был донъяға ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа килгәнмен, шуға күрә һүҙемде лә әйтеп өлгөрөргә тейешмен", - тип, министрға шахталағы хәлдәрҙе шартлатып әйтеп биргән. Минең кесе мырҙаларым был мәлдә бик бәләкәй булды. Мин иһә атайым эргәһендә йөрөп, кешенең күҙенә тураһын шартлатып әйтергә өйрәндем. Ҡыҙыу ҡанлылыҡ менән түгел инде, хәҡиҡәткә тоғролоҡ сифатым да атайымдан килә. Ә Өммөгөлсөм өләсәйебеҙ рухи яҡтан шул тиклем көслө кеше булды. Уға йомош һорап килгән башҡорт балалары йомошон урыҫ теләндә әйтһә: "Ата-әсәйеңде ебәр", - тип кире ҡайтара торғайны. Нәнәйебеҙ беҙгә үҙ дәрәжәбеҙҙе белеп йәшәргә өйрәтте.

**▸ Ә тәү башлап баш ҡалабыҙ Өфөгә килеүегеҙ нисегерәк булды, ниндәйерәк тойғолар кисерҙегеҙ?**

✓ ***Беҙҙең халыҡ вәкилдәре күберәк арыҫланды хәтерләтә. Тураһын әйтеү һәм ишекте шартлатып ябып сығып китеү кеүек һыҙаттар менән эшҡыуарлыҡта ғына түгел, ҡәҙимге тормошта ла алға китеп булмай.***

# Нәҫеленән, затынан…

**МАРС:** Салауат ағайым Свердловскиҙа журналисҡа уҡыны, Гайҙа, Ырымбурҙа эшләне. Шуға күрә ул башҡорт мөхитенән алыҫыраҡ торҙо. Мин иһә мәктәпте тамамлап, махсус белем алғас, үҙебеҙҙең тыуған яҡта эш башланым, Төйләгән районына күрше ятҡан Ейәнсура, Күгәрсен райондарының башҡорт егеттәре менән аралаштым. Өфөлә 1998 йылда эшләй башланым да, 2000 йылда бында күсеп килдем. Шуға күрә Өфөгә килеүемә һәм ундағы кисерештәремә мин алдан уҡ әҙер инем инде.

**САЛАУАТ:** Ырымбурҙа йәшәгәндә минең проблемаларым бик күп ине. Әммә ысын бәхеттең ниндәй икәнлеген Өфөгә килгәс кенә аңланым. Мин бөгөн иң бәхетлеһе. Ырымбурса әйткәндә, "бәхетлейший" кеше. Проблемалар бер ваҡытта ла бөтмәй: әммә донъялағы иң ҙур проблема - үҙ туған телеңдә аралашмаған бауырҙаштарың араһында булмауың.

▶ **Арыҫланды "йәнлектәр батшаһы" тип атайҙар. Уға ғорурлыҡ, ҡыйыулыҡ хас. Юлбарыҫ иһә һығылмалы, арыҫлан кеүек күкрәк киреп һерәйеп ултырыуға ҡарағанда, шыуышып, ҡорбанына яҡынлауҙы хуп күрә. Һеҙ бына журналистика һәм эшҡыуарлыҡ өлкәһендә ҙур уңышҡа өлгәшкән кешеләр булараҡ, ҡанығыҙҙағы арыҫлан менән юлбарыҫты нисек итеп яраштыра алдығыҙ? Хәҙерге заман ысынбарлығы шундай: ул беҙгә күберәк юлбарыҫ булыуҙы талап итә. Шулай түгелме?**

**МАРС:** Өммөгөлсөм өләсәйебеҙҙең атаһы бик күп мал тотҡан, 75 дисәтинә ере булған, тире иләгән. Әсәйебеҙҙең яғынан олатайыбыҙ спирт заводы директоры булып та эшләгән. Һәр хәлдә, эшҡыуарлыҡ беҙҙең ҡанда бар, тимәксемен. Беҙ бала саҡта киноға бара торғайныҡ. Әсәйебеҙҙән һәр ҡайһыбыҙ 5-әр тин аҡса алабыҙ. Ағайымдар киномеханиктан билет алған ике арала мин уларҙың аяҡ араһынан үтеп китәм дә, киноны ултырғыстар аҫтынан бушлай ҡарайым. Янда ҡалған аҡсаны печенье йәки башҡа төрлө тәм-том алыр өсөн тотонған, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, әлбиттә, мин ул аҡсаны кинонан ҡайтышлай дин тотоусы бер инәйгә хәйер итеп бирә торғайным. Ни өсөн печенье алмай шулай иткәнмендер, үҙем дә аңлата алмайым. Ҡанда булғандыр инде, тип уйларға ғына ҡала бында.

Ә эшҡыуарлыҡҡа килгәндә, унда бер аҙ арыҫлан да, күберәк юлбарыҫ булырға кәрәк инде. Эшҡыуарлыҡты башлаған саҡта күберәк юлбарыҫ булырға ла, капитал туплағас, исемең танылғас, йәғни арыҫланға әүерелгәс, аҙаҡ шул шөһрәтең, шул исемең һине үҙе алға әйҙәп китәлер инде. Беҙҙең халыҡ вәкилдәре тура һүҙлелеге менән күберәк арыҫланды хәтерләтә. Дөрөҫөн әйткәндә, тураһын әйтеү һәм ишекте шартлатып ябып сығып китеү кеүек һыҙаттар менән эшҡыуарлыҡта ғына түгел, ҡәҙимге тормошта ла әллә ни алға китеп булмай. Башлаған эшең килеп сыҡһын өсөн шул эшеңде һәм унда ҡатнашҡан кешеләрҙе энәһенән-ебенә тиклем белергә, өйрәнергә кәрәк. Минең, мәҫәлән, иң тәүге үҙаллы эшем шул булды: дебет шәл бәйләп хөкүмәткә тапшырған әсәйемә ял йортона путевка юллап бирҙем һәм иртә яҙҙан бесәнһеҙ ҡалған малдарыбыҙға үҙемсә һалам хәстәрләп, уларҙы имен-аман күгүләнгә баҫтырыштым.

**САЛАУАТ:** Атайһыҙлыҡ кешенең характерында ныҡ сағылыш таба. Беҙҙе ҡыйырһытһалар, ҡайтып, әсәй кешегә ошаҡлашыу ҡағиҙә булараҡ ҡабул ителмәгән. Мин армиянан ҡайтып, бер аҙна үтеүгә, хәрби комиссариаттың тәҡдиме буйынса редакцияла эшләй башланым. Армияға тиклем мәктәптә физкультуранан, хеҙмәттән уҡыттым. Ул саҡта Марс өсөнсө класта ғына уҡый ине әле. Марстың ҡыйыулығында минең партия органы булған гәзиттә эшләүем дә роль уйнағандыр, тием. Минең үҙемдең, мәҫәлән, атай һымаҡ күреп арҡаланыр кешем булмағас, үҙемдәге ҡыйыуһыҙлыҡтың ҡайҙан килгәнен бик яҡшы тоям. Беҙҙең ғаиләлә иң ҡыйыуы Марс һәм был сифат арыҫланға хас. Мин үҙем бөгөн Марс ҡустыма таянам.

***Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарҙа тырмашыу, кеше булырға ынтылыу тойғоһо республикала йәшәгән башҡорттарға ҡарағанда көслөрәк барыбер. Бер мәл Төйләгән районы ауылдарының урта мәктәпте тамамлаусылар араһында кемдең күберәк юғары уҡыу йортона уҡырға ингәнен махсус рәүештә тикшереп ҡараным. Иң күбе Аллабирҙе, Мәксүт ауылы мәктәптәрен тамамлаған башҡорт балалары булып сыҡты.***

Мин үҙем редакцияла эшләгән саҡта арыҫланға әүерелдем. Һәр ваҡыт үҙемдең артымда 70 мең журналистың иңен тоя торғайным. Ә бына Ырымбурҙа йәшәй башлағас, арыҫлан да, юлбарыҫ та түгел, ҡайһы бер ваҡыттарҙа бесәй балаһы кеүек йәшәргә тура килде. Башҡорттарға йәшәр өсөн Ырымбур еңел ҡала түгел. Мин Өфөгә килеп йәшәй башлағас, ысын мәғәнәһендә арыҫланға әүерелдем. Ҡайһы ваҡыт, бигерәк тә урамда йә магазинда, юлбарыҫҡа ла әүерелеп алырға тура килә. Ғәҙелһеҙлеккә осраһам, шундуҡ яуап бирә торған холҡом бар барлыҡҡа, әммә һәр ваҡыт арыҫлан булыуҙың да насар эҙемтәләргә алып килгәнен яҡшы беләм.

▶ **Һеҙҙең фекерҙәрҙән шул аңлашыла төшә: үҙендә юлбарыҫтың һәм арыҫландың сифаттарын берләштерә, уҡмаштыра һәм килештереп йәшәтә алған кеше генә тормошта нимәгәлер өлгәшә ала. Шулай түгелме? Донъяла бит башҡа төрлө йәнлектәр ҙә, башҡа төрлө сифаттар ҙа, характер-һыҙаттар ҙа бар…**

**САЛАУАТ:** Беҙ бәләкәй саҡта йәй көнө хатта йылғаға һыу инергә барырға ваҡытыбыҙ булманы. Бесәндән ҡайтыуыбыҙға өйҙәге мең мәшәҡәттәр ҡаршы ала торғайны. Малды көтөүҙән ҡаршыларға кәрәк, баҡсаға һыу һибергә, утарға, утын ярырға кәрәк, барыһы ла кәрәк. Өләсәйебеҙҙең мотлаҡ үтәлергә тейешле ҡануны шул булды: эште урын еренә еткереп эшләргә мотлаҡ кәрәк. Әгәр ҙә һин утын яра йә өйә башланыңмы, шуны тамамламайынса тороп, бер ҡайҙа ла китә алмайһың. Тырышлығың булмаһа, ҡоро икмәк, ҡоро сәй менән генә ултыраһың инде. Беҙ тормошта нимәгәлер өлгәшкәнбеҙ икән, был фәҡәт өләсәйебеҙҙән һәм әсәйебеҙҙән беҙгә күскән тырышлыҡ сифаты арҡаһында ғыналыр.



**МАРС:** Әсәйебеҙ бесән сапты, утын әҙерләне, төндәр буйына шәл бәйләне. Һығылмалы булды, күп осраҡта өндәшмәүҙе хуп күрҙе. Беҙҙе асылда өләсәйебеҙ тәрбиәләне. Өләсәйебеҙ күберәк арыҫлан булһа, әсәйебеҙ юлбарыҫ ролендә ине. Өләсәйебеҙ күп һөйләмәне, атай вазифаһын башҡарып, берҙе ныҡ итеп беҙгә ҡарап ҡуйыуы ла күпкә ишара ине. Әсәйебеҙ иһә ипләп кенә: "Атайығыҙ бына был саҡта шулай итер ине", - тип, беҙгә уның яҡшы сифатын иҫебеҙгә төшөрә торғайны. Ҡайһы саҡта мин ағайымдарға ҡарап: "Ҡайһыһына оҡшарға икән?", - тип уйлана торғайным. Юлай ағайым арыҫлан кеүек йөрөй торғайны, Салауат ағайым юлбарыҫҡа тартты күп осраҡта. Үҫә килгәс, ике ағайымдың да сифаттарын үҙемдә күрә, тоя башланым.

Беҙ атайһыҙ үҫһәк тә, етемлекте тойманыҡ, ашарға ризығыбыҙ һәр ваҡыт мул булды. Ҡайһы бер атайлы ғаиләләр ҙә беҙҙең һымаҡ етеш йәшәмәй ине. Беҙ мәктәпкә ап-аҡ яға тағып йөрөй торғайныҡ. Өләсәйебеҙ ҡайһы бер әбейҙәр кеүек, тыштағы ултырғыста хәбәр һатып, ғәйбәт һөйләп, көнбағыш ярып ултырманы. Беҙ мәктәпкә алты саҡрымға йәйәүләп йөрөнөк. Мәктәптән ҡайтып ашайбыҙ ҙа, һарайға йүнәләбеҙ. Мал һуғарабыҙ, тиҙәк көрәйбеҙ, бесән һалабыҙ. Мин хәҙер улдарыма ул саҡтағы һарайҙы бала сағымдың "фитнес клубы" тип һөйләйем. Ҡыш көндәрендә һарайға китер алдынан әсәйем миңә: "Бер юлы һарайға ике биҙрә һыу тотоп бар ҙа, кире килгәнеңдә таш күмер тейәп алып кил. Энергияңды тегеләй-былай йөрөп, бушҡа сарыф итмә", - тип әйтә торғайны. Әле яңыраҡ Күгәрсен районының Үрге Бикҡужа ауылында өләсәйебеҙҙең исемен ҡушып, "Өммөгөлсөм мәсете" астыҡ. Мәсет асыу тантанаһында әсәйебеҙ ҙә сығыш яһаны. "Мин бына өс малай үҫтерҙем. Шуларҙың иң кесеһе ошонда мәсет төҙөп, өләсәһенең исемен ҡушып, беҙҙе шатландырыр тип һис тә уйламағайным уларҙы үҫтергән саҡта. Мин донъялағы иң бәхетле әсәй", - тигән һүҙҙәренән һуң мәсет асырға килеүселәрҙең күҙенә йәш эленде.

▶ **Һеҙ ойошторған Кинйә Арыҫланов исемендәге хәйриә фондының эшмәкәрлеге хаҡында ниҙәр әйтерһегеҙ?**

**МАРС:** 1993 йылда Көйөргәҙе районының Кинйә ауылында Кинйә Арыҫланов исемендәге музейҙың нигеҙ ташын Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов һалды. Нисектер, беҙҙең фондтың нигеҙ ташы булараҡ та һалынды ул һәм беҙ уны традицияға әйләндерҙек һәм 2007 йылда был башлаған эштәр Кинйә Арыҫланов исемендәге хәйриә фондын асыуға алып килде. Ул саҡта миңә утыҙ йәш ине. 2001 йылда музей асылғанда халыҡ күп йыйылды. 2007 йылдың йәйендә музейҙың алдына Кинйә Арыҫлановҡа һәйкәл ҡуйҙыҡ. Алдағы йылдарҙа Кинйә Арыҫлановҡа мавзолей төҙөргә лә ниәт бар. Күгәрсен районының Үрге Бикҡужа ауылы янындағы Йомағужа һыуһаҡлағысы эргәһендә ер алып, туристик база асырға тигән уйыбыҙ ҙа бар. Әле унда беҙҙең база төҙөлөп ята. Алла бойорһа, унда беҙҙең һыуһаҡлағыс буйлап туристик һыу маршрутыбыҙ эшләйәсәк. Маршрут һыу буйлап Бөрйән, Күгәрсен райондарын тоташтырасаҡ. Һыуһаҡлағыстың Бөрйән ярында ҡунаҡхана төҙөргә лә итәбеҙ. Беҙҙең туристик комплекс бер үк ваҡытта башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен, көнкүрешен, мәғарифын үҙ эсенә аласаҡ. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең эштәр ЮНЕСКО менән берлектә башҡарыласаҡ. Әле Көйөргәҙе районынан бер төркөм Екатеринбург ҡалаһына Урал-Себер ЮНЕСКО үҙәгенә стажировкаға барып ҡайтты.

2007-2008 йылдарҙа Бөрйән районында Бабсаҡ бейҙең зыяраты янында байтаҡ эштәр башҡарҙыҡ. Мәрмәрҙән һәйкәл ҡуйып, тимер ҡойма менән кәртәләп алдыҡ. Хәҙерге көндә Бабсаҡ бей ҡәбере һәм Йылҡысыҡҡан күле базаһында тарихи-этнографик музей комплексы төҙөү өҫтөндәбеҙ. Күл янында Аҡбуҙаттың скульптураһын эшләп ултыртырға тип тә уйлайбыҙ. Шунда уҡ башҡорт аш-һыуҙарын тәҡдим иткән кухня төҙөргә лә ниәтләнгәнбеҙ, бының өсөн һөт-ит комплексы төҙөү ҙә маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

**САЛАУАТ:** Беҙ был фондты үҙебеҙгә шәхси байлыҡ туплау маҡсатында төҙөмәнек, шуға күрә лә эшебеҙ әүҙем баралыр тип уйлайым. Шәхси байығыуҙа маҡсат итеп ҡуйған фондтар ғүмерле булмай бит инде. Әле бына Көйөргәҙе, Күгәрсен, Бөрйән райондарында байтаҡ эштәр алып барабыҙ. Киләсәктә, Алла бойорһа, эшмәкәрлегебеҙҙең географияһы байтаҡ киңәйер, тигән уйҙабыҙ. Барлыҡ аҡса туплау, төҙөлөш эштәре менән Марс ҡустым етәкселек итә, ә миңә инде, яҙыу-һыҙыу менән бәйле кешегә, үҙ шөғөлөмә тап килгән эштәр менән шөғөлләнергә тура килә. Әле Кинйә ауылының шәжәрәһе буйынса ике китап тамамланыҡ, уларҙы сығарырға кәрәк. Бынан тыш, башта әйткәнемсә, Кинйә ҡартатайым тураһында әҙәби әҫәр өҫтөндә эшләйем. Артабан инде Юлбарыҫ ҡартатайҙың архивтарҙа һәм башҡа сығанаҡтарҙа ҡалған тарихи эҙҙәрен юллап, уның да һынын туғандарым алдында баҫтырырбыҙ, тигән өмөттәмен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай изге ғәмәлдәр башҡарып, алдағы көндәргә матур ниәт-уйҙар менән йәшәй Арыҫлан һәм Юлбарыҫ вариҫтары. Улар хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда, уның баш ҡалаһы Өфөлә йәшәүҙе бәхеткә тиңләй. Бер уйлаһың, милли ҡаһарманлыҡтың ошонан да ҙурыраҡ һәм әһәмиәтлерәк мәғәнәһе бармы икән? Ә бит улар үҙ ерендә йәшәүҙе бәхеткә тиңләгән өсөн дә милләтебеҙ һәм республикабыҙ өсөн бөйөк эштәр башҡара. Тимәк, Арыҫлан һәм Юлбарыҫ атлы уҙамандар ҙа донъяла бушҡа йәшәмәгән.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Һап-һау егеткә ул тиң була аламы? Телһеҙ һаҡауҙы алған, тип, күҙен дә астырмаҫтар, кешеләрҙең мәрхәмәтһеҙлеген үҙ йәнендә әҙ татынымы? Ә кешеләрҙең фәҡәт шулай тип әйтерҙәренә шик юҡ.**






Рөхсәтен алғас, икәүләшеп мотоциклға атланып сығып киттеләр. Теге килгәндәрендә үҙҙәре оҡшатып, яратып өлгөргән тәбиғәт мөйөштәре, таныш һуҡмаҡтары был яҡтарҙа ла байтаҡ. Тәбиғәт иркенлеге, мөхиттең күркәмлеге күңелгә лә шифалы тәьҫир итә бит ул. Ниндәй генә күңел ярһыуҙары кисерһәң дә, тәбиғәт ҡосағына сумыу менән, тәбиғәттең хозурлығын күреү менән, үҙең дә ошо тәбиғәттең бер остоғо икәнен тойоу менән хәүеф-хафалар үҙҙәренән-үҙҙәре тарала.

Бөтәһе лә үҙенән-үҙе хәл ителер әле, тип, анһатҡа һалышып йөрөүенәнме, яҙмыштарын Хоҙайға тапшырыуынанмы, ошо хәлгә ҡалғанын аңлаған егет, күңел тетрәнеүҙәре кисергән мәлдәрендә, әгәр киләсәктә осрашырға яҙһа, бер кемгә һылтанмай, дилбегәне үҙ ҡулына алырға ҡарар иткәйне.

- Гүзәл, теләгең булһа, мажараларыңды бер заман һөйләрһең, үҙеңдең ихтыярыңда. Хәҙер һүҙ ул турала түгел. Ошо арала булған ваҡиғаларҙа мин үҙемде ғәйепләп, күп әрләнем, яңылышҡан мәлдәремде аңланым. Һине ҡаңғыртмайым, һине ҡурсалайым, тип уйлап, бөтәһен дә һинең яйыңа ҡуйғаныма үкенәм. Бөгөндән улай булмаясаҡ! Әгәр киләсәктә лә бергә булырға теләһәк, беҙ өйләнешергә тейешбеҙ. Быға тиклем яратам тип хәбәр һөйләшмәнек, һүҙ ҡуйышманыҡ, вәғәҙәләр бирешмәнек, ләкин һин минең иң яҡын кешем, һинһеҙ йәшәүемде күҙ алдына килтерә алмайым, һин миңә кәрәкһең. Әгәр мин дә һиңә кәрәкмен тип уйлаһаң, һүҙеңде әйтерһең. Мин әле әйткәндәремде һәйбәтләп уйланым, үҙем әҙер, үҙемә ышанам. Атайым, әсәйемдәрҙең ризалығын алдым. Август айында һине ҡыуандырайым тип ҡанатланып килгәйнем, күрешергә насип булманы. Киләһе аҙнала йома көндө ағайым менән еңгәм инәйеңә танышырға, һөйләшергә киләләр. Әгәр һин хәҙер асыҡ ҡына ыңғай яуап бирһәң, ҡалған хәлдәр тураһында яйлап һөйләшербеҙ, аңлашырбыҙ. Әгәр, берәй етди сәбәбең булып, ризалығыңды бирмәһәң, аңлашып тороуҙың кәрәге лә юҡтыр...

Гүзәл түшенә һыйынған көйө тик тора. Ишеткәндәренә шаңҡып торамы, әллә көткән һүҙҙәрен ишетеп ҡаттымы?

- Риза булһаң, ҡайтып, инәйгә әйтәбеҙ ҙә ҡалаға китәбеҙ. Йомаға әҙерләнергә ризыҡ, кәрәк-яраҡтар алып килербеҙ. Һин инәйгә ярҙамлашырға ҡалырһың, туғандарығыҙҙы саҡырырһығыҙ. Мин нимәләр кәрәген белешеп, алып килеп йөрөрмөн...

- Ми-ми-н дә-ә-ә һағынды-ым, шулай булһы-ы-н! - Батыр ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс үҙе илап ебәрә яҙҙы. Ҡыҙҙың сикәләрен ике усына алып, күҙҙәренән бит алмаларына тәгәрәшкән йәштәрен сүпләп үбергә кереште. Күңелдәрендә ташҡан хистәренә бирелеп, күпме торғандарҙыр, йәйлап тынысландылар. Гүзәл ашыҡмай ғына ошо арала кисергән хәл-ваҡиғалары тураһында бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Һөйләше һиҙелеп үҙгәргән, ҡайһы берҙә бөтөнләй тотлоҡмай, һөйләмен тулы әйтә ала. Үҙе һөйләгәндәренән тулҡынлана башлаһа, әҙерәк тымып тора ла, тынысланғас, һүҙен дауам итә. "Беҙҙең кеүектәрҙе Мәскәүҙә уңышлы дауалайҙар икән", тип, интернатта бергә уҡыған иптәш ҡыҙы уға былтыр уҡ һөйләгән. Үҙе шул яҡтағы ҡалала ҙур тегеү комбинатында эшләй икән. "Аҡса йыйам, быйыл тултыра алмаһам, икенсе йыл мотлаҡ барып дауаланасаҡмын. Үҙем менән эшләгән бер ҡыҙ, туғандары күмәкләп аҡса йыйып биргәс, шунда дауаланып сыҡты. Хәҙер кейәүҙә, бәпәйҙәре бар, башҡалар менән тигеҙ аралаша башлағас, үҙе бөтөнләй икенсе кешегә әйләнде: күҙҙәре ялтырап тора, бәхетле, шат йәшәй", - тип йәнен сәмләндергән.

Унан һуң, Батыр, өйләнешәйек, тиһә, нимә әйтермен, тип байтаҡ аптырап йөрөгән ҡыҙ. Ата-әсәһе алдына баҫһа, нимә тиер? Һап-һау егеткә ул тиң була аламы? Телһеҙ һаҡауҙы алған, тип, күҙен дә астырмаҫтар, кешеләрҙең мәрхәмәтһеҙлеген үҙ йәнендә әҙ татынымы? Ә кешеләрҙең фәҡәт шулай тип әйтерҙәренә шик юҡ. Батырҙы шул һынауға дусар итергә ни хаҡы бар? Бинаһаҡҡа яуыздарҙан яфаланырға уның ни гәйебе бар? Ата-әсәһенең фатихаһын алмайынса өйләнешеп, ҡырҙа йәшәгән хәлдә лә, әгәр бәпәйҙәре тыуһа, әсәләренән башҡа уларҙың телен кем асыр, әсәйҙәре һөйләшергә өйрәтмәһә, кем өйрәтер? Үҙең рәтләп һөйләшә алмағас, сабыйыңа нимә тип өндәшерһең, үҙең кеүек һаҡау һөйләшеүҙән башҡа, нимәгә өйрәтә алырһың? Юҡ! Балаларына ундай аяныслы яҙмышты йәне бар төшөндә лә теләмәҫ.

Дауаланып, ҡәҙимгесә һөйләшеү һәләтемде тергеҙмәйенсә тороп, башҡаның яҙмышына, киләсәк тормошона ҡыҫылырға хаҡым юҡ, тигән фекергә килә. Нык ышанған лингофон аппараты ярҙамында эшләгән күнекмәләре һиҙелерлек һөҙөмтәләр бирмәгәс, бәләһенән ҡотолорлоҡ башҡа сара юҡтыр, хәҙер нимә эшләрмен икән, тип аптырауға ҡала. Батырҙың бер ай самаһы эргәһендә булмауынан файҙаланып, Мәскәү клиникаһында дауаланыу шарттарын белешеп ҡайтырға уйлай. Аҡсаһы самалы икәнен белгән әхирәте үҙенең бригадаһына, цех, фабрика профсоюз ойошмаһына мөрәжәғәт итеп, ярҙам фонды ойоштороуға ирешә. Тиҙ арала ҡәҙимге оҙайлы дауаланыуға етерлек аҡса йыйыла. Хушлашҡандарында: "Әгәр дауаланыуым һиҙелерлек яҡшы һөҙөмтәләр бирһә, ҡайтам, үҙгәрештәр булмаһа, ҡайтмайым, шунда эшкә ҡалам, шуға күрә Батырҙың мин ҡайҙа икәнемде белеүенән белмәүе яҡшы булыр, тиҙерәк төңөлһә, тиҙерәк онотор. Миңә Батырһыҙ йәшәүе ҡыйын булһа ла, уның үҙен миңә бурыслы тойоп, өйләнмәй, донъя ҡормай ыҙалап йәшәүен күреү бигерәк тә ҡыйын булыр. Яҙмышына ҡыҫылғыҡ килмәй, үҙенә тиң һау ҡыҙҙы табыр әле", - тип, Әлфиә әхирәтенән Батырға ҡайҙа китеүен әйтмәҫкә икмәк тотторор ант иттерә.

Әмәлендә күрә, бөтәһе лә уңай килеп сыға: дауаханала буш урын да табыла, аҡсаһы ла ике ай дауаланыу курсы үтергә етерлек була. Үҙ эштәрен яҡшы белгән табибтар, бер ниндәй ташламаһыҙ, көн һайын иртәнән кискә тиклем дарыуҙар менән дә, төрлө аппараттар ярҙамындағы күнекмәләр менән, бер кемгә лә тынғы бирмәй, дауалауҙы ифрат көслө алып баралар икән. Гел үҙе һымаҡтар араһында булғас, оялыу, тартыныуҙары тиҙ үтә.

Көн һайын ябай ғына балалар йырҙарын йырлаталар. Эй, ҡыҙыҡ инде! Яслегә йөрөгән балалар һымаҡ ҡыландыралар: яңғыҙ ҙа йырлаталар, бергә лә. Ауыҙҙы ҡыйшайтып, телде болғап, әллә ниндәй ят ауаздар сығарып, юрамал һүҙҙәрҙе боҙоп һөйләндерәләр. Хәлең бик насар түгел бит, ниңә төңөлөп йөрөнөң, ана, һинән дә ҡатмарлыраҡ хәлдәгеләр һинән матурыраҡ һөйләшергә өйрәнгән. Ниңә атай-әсәйҙәрегеҙ шул хәтлем ғәмһеҙ, моңһоҙ икән, тип һуҡраналар, тип, әсенеп һөйләне Гүзәл. Тағы бер-ике йыл телһеҙлегең менән килешеп, үҙеңә ҡул һелтәп йөрөһәң, һөйләшеү һәләтеңде киренән тергеҙеү мөмкинлеге бөтөнләй юғалыр ине, тип әрләнеләр. Хәҙер ҡәҙимге аңлайышлы һөйләшәмдер, эйе бит? Ситтән тыңлаһаң, нисек ишетелә?

Үҙен үҙе тыңлай алмағанына үкенгән кеше һымаҡ, бойоғоу ҡатыш шат күҙҙәре менән, дөрөҫөн генә әйт инде, тигән кеүек инәлеп ҡарай Батырҙың күҙҙәренә.

Алсаҡ йөҙ, күтәренке күңел менән килеп ингән йәштәрҙе күргәс, инәйҙең дә борсолоуҙары баҫылды.

- Эй, балалар, бер берегеҙҙе ыҙалатмай, гел шулай шат йәшәһәгеҙ ни була, үҙегеҙ уйлап сығармаһағыҙ ҙа был донъяла бола, бәләләр баштан ашҡан.

- Инәй, беҙ Гүзәл менән бергә йәшәргә килештек, әгәр ризалыҡ бирһәгеҙ, киләһе йома ағайым менән еңгәм һеҙгә һөйләшергә килерҙәр, улар минең хәбәремде көтәләр. - Батырҙың был һүҙҙәрен эстән генә көтөп йөрөгәнгәме, йәштәрҙең киләсәк тормошо өсөн борсолоуҙанмы, артыҡ тулҡынланыуҙанмы: "Ярай, хәйерлегә генә булһын инде", - тиеүҙән артыҡ теләмәр тота алманы инәй кеше. Кем балаһына яҡшылыҡ теләмәһен? Тыйнаҡ, аҡыллы егет, ҡыҙын үҙ ҡарындашы кеүек һаҡлап, яҡлап алып йөрөй, ҡәҙерен генә белергә кәрәк ундай кешенең.

* * *

Ҡаланан тейәнеп ҡайттылар. Йөҙҙәре алсаҡ, үҙҙәре шат. Батыр көн һайын килеп ярҙамлашам тиһә лә, ыҙалап йөрөмәҫкә ҡуштылар. Ҡунаҡҡа әҙерлек мәшәҡәттәрендә аҙна тиҙ үтте. Ағаһы менән еңгәһе һөйләшкән көнөнә килеп еттеләр. Ары-бире кәңәшләшеп, хәл-әхүәл белешеп, уй-ниәттәрен теүәлләп алдылар ҙа ауылға киттеләр. Һәр осраҡта ла һаҡ булырға өйрәнгән ағаһы, барыбер, ауылға ҡайтып, сетерекле хәлде асыҡлап килгән икән. Әсәһенең фекерен, уларҙың талаптарын, шарттарын асыҡ белмәйенсә килеүҙән тыйылған тәки. Шуға ла Батыр эргәһенә килгәндә уларҙың сырайы йәйгеләге кеүек аяҙ түгел ине. Хатта мәңге төңөлмәҫ, бошонмаҫ еңгәһе лә был билдәһеҙлеге менән йәнде тертелдәткән сәйәхәткә артыҡ шат түгел, шикелле. Һөмһөрө ҡойолоп, этә-төртә һөйләшеп ултырҙы. "Барабыҙ ҙа барабыҙ", - тип алдан ҡысҡырынғаны өсөн иренән һүтелгәндер инде, бисара. Кәйефтәре шулай икәнен йәшереп тә маташмайҙар, беҙгә бер бәлә генә булдың, тигән кеүек һөйләшәләр. Телһеҙ ҡыҙҙың туғандарын рәнйетмәй генә был яуаплы мәрхәмәтһеҙ бурыстан ҡайһылайтып имен ҡотолорбоҙ икән, тигән борсолоуҙары йөҙҙәренә сыҡҡан ине, ни булһа ла.

Батыр барыһы менән дә таныштырып сыҡҡас, күңелдәре бөтөнләй кәрәйеп, йөҙҙәре асылып китте. Еңгәһе үҙ асылына ҡайтып, кәйнеше менән булышырға кереште хатта. Табын йәнләнеү менән, уйын-көлкөлә хәбәрҙәр ҙә артты.

- Ҡайһылай кәләш тапҡан, хәйләкәр! Иркәләнгән арлан бесәй һымаҡ мырылдап ҡына йәшәр әле...

Йәйгеһен ҡайнешен яҡлайым тип, ҡәйнәһе менән һүҙгә килешкән еңгәһе хәҙер еңеүсе булып ҡайтасағына ихлас шатланыуын йәшерә алманы. Шул күңел күтәренкелегенән тыйыла алмай, бер үҙе һөйләнде. Һүҙ ыңғайы һүҙ сығып, буласаҡ килендәше ҡәйнеше менән бер ерҙә эшләйәсәге, әммә туйға тиклем икеһе ике урында йәшәргә йыйыныуҙарын ишеткәс, был "гәҙелһеҙлеккә" юл ҡуймаҫ өсөн бөтә ойоштороу һәләтен екте. "Юҡ, улай булмай, бата уҡытайыҡ, бергә йәшәһендәр. Хәҙер ата-әсәһенең ризалығын алмайынса ла бергә йәшәйҙәр әле", - тип яу һалды. Муллаһын да таптылар, батаһын да уҡыттылар. Еңгәһе, ҡыҙ йәшерегеҙ, оҙатып алабыҙ тип, тағы әллә нимәләр болғарға йөрөй ине, саҡ тыйып алып ҡалдылар. Йәштәр бергә йәшәргә риза булдылар, ләкин Батыр туйға тиклем ҡушыуҙарына ҡырҡа ҡаршылыҡ күрһәтеп, бөтәһен дә хәтһеҙ аптырауға һалды. Ахырҙа, әйҙә үҙҙәренә нисек уңай, шулай йәшәһендәр, тип, барыһы ла килешкән шарттарға күнделәр. Танышыу, әйттереү йолаларын урынына еткереп, бик йылы ихлас аралашты булаҫаҡ туғандар.

Йәштәр ҡалаға бергә ҡайттылар. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә бер нәмә лә үҙгәрмәне тиерлек. Элек бер-береһенә нисек йылы мөнәсәбәттә булһалар, хәҙер ҙә шулайҙар. Яңылыш берәй нәмә эшләп йә әйтеп, тағы ла аңғармаҫтан өркөтөп ҡуймайым тип, Батыр яҡын булырға ныҡышманы. Гүзәл дә түҙемһеҙлек күрһәтмәне. Бергә йәшәһәләр ҙә, туйға тиклем енси яҡынлыҡҡа бармаҫтарын күңелдәре менән генә аңлаштылар кеүек. Ин мөһиме, табыштылар, аңлаштылар. Туғандары белә. Аллаға шөкөр, тормоштарында, яҙмыштарында бөтәһе лә яйланып килә. Ә үҙҙәренең хәл итәһе мәсьәләләрен үҙ-ара килешеп хәл итергә өлгөрөрҙәр әле, тигән уй икеһен дә тынысландырҙы. Гүзәлдең ҡото осоп: "Бәпәйебеҙ булып ҡуйһа?" - тигән һорауы ҡолаҡты ярһа, нимә тип яуап бирерһең?

Батыр эшкә килгәс, лесхоздың ике фатирлы йортоноң бер яғын уға биргәйнеләр. Бәләкәйерәк булһа ла, икеһенә етерлек иркен ике бүлмәһе бар. Гүзәл килгәс тә өйҙө йыйыштырып, сандарын һөртөштөрөп, тәҙрәләргә үҙе алып килгән ҡорғандарын элеп ҡуйғайны, өйө йәнләнеп киткәндәй булды. Ҡырҙа йөрөп йонсоғанһыңдыр, өйҙә ултыр, әҙерәк ял ит, тип ҡараһа ла, Гүзәле сыҙамай эш белешә башланы. Бергә йөрөп эшкә урынлаштылар. Яңы урында үҙ һөнәре буйынса эште башлап китеүе ҡыйын булманы. Шул арала Яңы йыл яҡынлашты. Бер ялында Батыр бер үҙе генә ауылға хәл-әхүәл белешергә ҡайтып килде. Унда ла эштәр көйлө булыуы менән шатландылар. Ата-әсәһе туғандарына йәүкәләгәндәр, кемдәре, ҡасан, кем сифатында саҡырылыуҙарын аныҡ билдәләгәндәр, туйға әҙерлек ҡыҙыу бара.

**(Дауамы бар).**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# “БАШҠОРТ ЮМОРЫ” КИТАБЫН...

## бергәләп яҙайыҡ



**"Алдар менән Ерәнсә ҡоро" рубрикаһы быйыл да конкурс булараҡ йөшәне гәзитебеҙҙә. Гәзитебеҙҙең тоғро дуҫы, хәҙер инде "Халыҡ дауаһы" рубрикаһын даими рәүештә үҙ кәңәштәре менән тулыландырып тороусы, шулай уҡ Әбйәлил районы мәҙәктәрен, ләҡаптарын йыйып, эленән-әле гәзитебеҙҙә баҫтырыусы авторыбыҙ Әнүәрә апай ХӘЙБУЛЛИНА-МОНАСИПОВА былтыр ҙа ошо конкурстың еңеүсеһе булғайны, быйыл да беҙ уны еңеүсе тип иғлан итәбеҙ. Икенсе еңеүсебеҙ - ул танылған ғалим-фольклорсы, профессор Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ. Шулай итеп, "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" рубрикаһы киләһе йылда ла конкурс булараҡ дауам итәсәк. Үҙебеҙҙең әҙәпле, тапҡыр, аҡыллы башҡорт юморын йыяйыҡ, "Башҡорт юморы" тигән китапты бергәләп яҙайыҡ, дуҫтар!**

### МАЙЛЫ ТАБАЛА САЛЮТ

Шәмсинур апай ҡунаҡтар өсөн, тип йүгереп йөрөп туң майҙа йәймә бешерә. Ул саҡта әле шыйыҡ май-фәлән юҡ. Уң йәшлек улы Шамил да шунда бөтөрөлә. Апай соланға сыҡҡан арала малай табаға һыу ҡоя, май түшәмгә тиклем атыла, таба дөрләп яна. "Салют, салют!" - тип һөрән һала малай. Әлбиттә, үҙенә сыбыҡ та эләгә. Шамил башҡа иптәштәренә лә өйрәтер, тип ҡурҡып, Шәмсинур апай хәлде күршеләргә лә еткерә. Бесәйгә - көлкө, сысҡанға - үлем, тигәндәй, ут сығыуы, малайҙарҙың бешеүе мөмкин бит. Әсәйҙәр күмәкләп "Балаң көршәктә ярмаҫ борон сыбыҡла" тигән мәҡәлгә таянып, малайҙарҙы сыбыҡ менән "уҡыта". Шунан һуң, кем салют яһаһын инде.

### ТЕЛ БАТЫР ҘА...

Дүрт йәшлек Айнурҙың етешмәгән ере юҡ. Бер көндө күп йылҡы аҫраған Мөхлисаларға килә был. Бер тай кемде күрһә лә тешләп ырғыта һәм сапсып башлай икән. Мөхлиса малайға өндәшергә лә өлгөрмәй ҡала, тай килеп тә сыға. Айнур: "Тейеп ҡараһын, ҡурҡмайым мин унан", - тип ғәйрәтләнә. Тай яҡынайыу менән үҙе бейек итеп өйөлгән әрҙәнә өҫтөнә елдереп менеп тә китә. Хужа сығып, тайҙы һарайға бикләгәс кенә малай ергә төшә. Үҙе һаман: "Мин ҡурҡмайым ул, юрый ғына тайҙы шаярттым", - тип маһая. Бахыр тел батырая, ә күңел һағая.

### ӘМӘЛЕНӘ КҮРӘ ҒӘМӘЛЕ

Шул уҡ Мөслихәләр ғаиләһе. Өйҙә бөтәһе ун кеше йәшәй, етмәһә, алты бесәйҙәре бар. Ул саҡта аҙыҡ-түлектең ҡыҫынҡы сағы. Малайҙарға күберәк ойоткан менән тукланырға тура килә, тик улар урындыҡҡа теҙелеп ултырыу менән алты бесәй ҙә йүгереп килеп етә. Һәр бесәйгә бүлһән, үҙенә бер-ике ҡалаҡ ҡына ойотҡан ҡала. Ни эшләргә? Илшат бер сеүәтә ойотҡанды ныҡ итеп һыуытып, бесәйҙәргә эҫерә лә, үҙҙәрен тышҡа сығарып, бикләп ҡуя. Меҫкен бесәйҙәр өшөй, дерелдәй, ҡисҡә генә индерә уларҙы малай. Тағы ойотҡан эсергә ваҡыт етә, әммә бесәйҙәр яҡын да килмәй. Хатта өйҙәгеһен ҡаймаҡланған ойотҡандан да ҡасалар.

Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тигәнең дөрөҫ икән. Илшат та бесәйҙәрен дә йәлләмәне тамаҡ өсөн, кәрәктәрен биреп, дерелдәтте.

### МОСЬКА, ЗЫЙТ!

Был ғаиләләге алты бесәйҙең береһенең исеме - Моська. Уны малайҙар эттәр менән һуғышырға өйрәткән. Ҡапҡа алдында эт күренеү менән Ғәли: "Моська, зыйт!" - тип әмер бирә. Ә тегеһе эттең томшоғон сапсып та ебәрә. Меҫкен эт сыйылдап ҡаса. Бесәй эре генә ҡаранып, ҡойма башында ултыра.

Айыуҙы ла бейетергә өйрәтеп була, тигән булалар, бына бесәйҙе эттәр менән һуғышырға өйрәтеп ҡара! Шуҡ малайҙар бар ерҙә һәр нәмә дер һелкенеп тора шул.

### "А", ТИ ҘӘ УЛТЫРАЛАР

Күрше Яңылбикә апайҙың балалары сос, телдәре лә тиҙ асыла, 3 йәштән китап уҡый башлайҙар. Өлкән ҡыҙы 1-се синыфҡа барған. Әммә 10-15 көн үткәс, ҡыҙ мәктәпкә бармаясағын белдерә. Сәбәбен һорағас: "Күнелһеҙ, бер туктамай һыҙыҡ һыҙалар ҙа "а" тип тик ултыралар", - ти икән был. Тәрлөсә аңлатып, өгөтләп, быны уҡырға ебәрәләр. Шунан алып ҡыҙ өндәшмәй ҙә, зарланмай ҙа. Шулай бер көндө әсәһе быны уҡытып ҡарарға булған, тик ҡыҙ белгәндәрен дә онотҡан, дәрестә уҡытыусы ла һорамаған, быныһ белеүенә ышанған. Апай ҡыҙын мәктәпкә алып барып, эштең ниҙә икәнен аңлатҡас ҡына, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрә. Әле лә бала-сағa уҡыуға барһа, "а" тиҙәр ҙә торалармы, тип көләшәләр. Иман уҡыған һайын яңыра ғына, тигәндәрен бала аңламаған шул әле.

### "А", ТИП ӘЙТ...

1-се синыфта уҡыған Айҙарҙан уҡытыусы "а" хәрефен әйттерә алмай. Аптырағас, уҡытыусы өйөнә китә бынын. Малай йүгереп ҡайтып, ҡапҡаны бикләй ҙә йәшенә. Ҡапҡаны саҡ асып, өйгә инә уҡытыусы, тик унда берәү ҙә юҡ, ололар эштә. Ҡарана торғас, урындыҡ мөйөшөндәге толоп һелкенгәндәй була. Уҡытыусы асып ҡараһа, унын аҫтында ике малай ята. Береһе Айҙарҙың ҡустыһы икән. Һаман "а"-ны әйттереп маташа уҡытыусы, ә малай өндәшмәй. Толоп аҫтынан ҡустыһы: "А" тип әйт, әйтмәһәң, толоп әләкмәй үҙеңә", - тип ҡысҡыра. Бәҡтиһән, был икәүгә юрған юҡ, толоп ябынып йоҡлайҙар икән. Нишләһен, әйтә Айҙар был хәрефте.

Ошо инде сараһыҙҙан мараһыҙ булыу - малай ҙа йылы һөйәк һындырмауын аңлап, теләмәгән шөғөлдө лә башҡара.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

### КӨҘГӨ

Беҙҙең ауылда бер бәhлеүән кәүҙәле, йор һүҙле олатай булды. Йөҙрөгө генә көрәк дәүмәле булғандыр. "Ҡатын-ҡыҙға күҙ-ҡолаҡ булып тороу кәрәк. Бына мин эсендәге тышында булһын, тип, әбейҙән "зиркало" яһаным", ти торғайны. Инәй, ысынлап та, бигерәк йоҡа, ябыҡ, үтәнән-үтә күренмәле ине. Ошонан һуң ауылда "ҡатындан зиркало яһаным" тигән лаҡап та йөрөнө.

Көн һайын иртән эшкә киткәндә урамда бер-нисә ҡатын-ҡыҙҙы осратам. Иртә таңдан йөҙҙәрендә "Ҡайҙан алып баш төҙәтергә икән?" - тигән һорау көҙгө кеүек сағыла. Был ҡатындарҙан кем "зеркало"яһаған икән - үҙҙәренән үҙҙәреме, әллә заманамы, тигән һорау тыуа. Һай, донъя...

### ЕТӘККӘ КИЛЕҮСЕЛӘР

Китапхана техникумын тамамлағандан һуң, Күгәрсен районының Туйымбәт ауылында эшләргә тура килде. Фатир хужабикәһе көләс, мәрәкәсел Хәзирә инәй мәрхүмә беҙгә, ике йәш ҡыҙға, ауыл егеттәрен ҡоҙалай. "Быныһы шыйыҡыраҡ, абай булығыҙ, тегеһенән йыраҡырак йөрөгөҙ. Бына иң шәбе Сәмиғулла, ниндәй эшкә тотонһа, емереп эшләй. Етәкләһәң, етәккә килә". Беҙ хихылдашып көлөшкән булабыҙ.

Бөгөнгө көндә ана шундай "Етәкләһәң, етәккә килеүсе" ир-йораттары күбәйҙе. Ҡатынын, балаларын ташлап, ҡайҙа икмәккә май һылап бирәләр, шайтан һыуы ҡоялар, ҡайҙа эшләргә кәрәкмәй - шунда муйындарын һуҙалар. Дөрөҫөрәге, хәлле яңғыҙ ҡатындарға "етәккә" киләләр. Һай, донъя...

### НАМЫҪ ҮЛСӘМЕ

Бала саҡтың бер хәтирәһе иҫкә төшә. Үҙенең яраҡлан көйөн көйләй-көйләй, атайым алаҫыҡ бурай. Беҙ бәләкәс ҡустым менән уның янында мәж киләбеҙ. Сыбыҡ осо туған бер олатай атайым янына килде. Туған тейеш кешенең күңелһеҙ йөҙөн абайлап, атайым балтаһын бураға терәне лә, уның янына сүгәләне.

- Бер-бер хәл булдымы әллә, абзый?

Байтаҡ ҡына өндәшмәй ултырғас, олатай кеше:

- Өс тәңкәлек тә хужалығың булмағас, кәпәс кейеп йөрөүемде ташҡыулсәйем, - тип ҡуйҙы.

Төшөп ҡалғанды эҙләп, "сәмәй"гә аҡса юллап, урам буйлап темеҫкенеүсе ҡайһы бер ир-егеттәр үҙҙәренең ирлек намыҫын нимә менән үлсәй икән?

### ҺЫНАТМА, ХИСМӘТУЛЛА!

Ауылда Хисмәтулла (исеме үҙгәртелде) тигән олатай бар. Бөйөк Ватан һуғышының бар дәһшәтен, әсеһен татыған был һуғыш ветеранын мәктәпкә йыл һайын осрашыуға саҡыралар ине. Һәр бер сығышында ул бер эпизодты һөйләр ине. "Һуғыштың тәүге көндәре, гел сигенәбеҙ. Бер көндө Жуков үҙе килде. Барыбыҙға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла, минең янға килеп: "Ну, Хисмәтулла, давай, һынатма, бөтән сигенергә хаҡың юҡ," - тине. Шунан бәреп алып киттек, әй, Берлинға тиклем ҡыуҙыҡ тегеләрҙе".

Элегерәк йәш саҡта көлә инем, хәҙер иһә: "Һиндәй ир-егеттәр еңеү килтерҙе шул, Хисмәтулла олатай," - тип уйлап ҡуям.

### ДЕРЖИ, МУЛЛА, САҘАҠА

Күрше ауылда бер ағай аят ашы үткәрергә булған. Элегерәк мулла табыуы ҡыйын ине. Ике ауыл аша барып, бер мулланы алып ҡайтҡан ағай, тик унан ҡәнәғәт ҡалмаған. Беренсенән, китапҡа ҡарап уҡыған, икенсенән, уҡыуы ла бик үк оҡшап етмәгән хужаға. 10 һум аҡсаһын алдан әҙерләп ҡуйған ағай: "Держи, мулла, саҙаҡа, биш тәңкәһе үҙеңә," - тигән.

Хәҙер ауылда был һүҙҙәр лаҡап булып йөрөй. Биргән саҙаҡаның аҙы-күбе булмай, ихластан булһын да, сауабы насип булһын.

### МӘТРИ, ЕЛЬЦИНДЫ ҺАЙЛАЙҺЫҢ

Һайлау алды кампанияһының ҡыҙыу осоро. Бөтә ерҙә Ельцинды һайларға, тигән өгөтләү бара. Һайлау көндө таңдан ҡапҡа алдына сығып, ауылды күҙәтәм. Элек халыҡ ул көндәрҙә аттарға ҡыҙыл таҫмалар тағып, гармун уйнап, мәҙәниәт йортона эркелешә ине. Ауылыбыҙҙа оҙаҡ йылдар мәктәптә уҡытҡан, кешеләргә алсаҡ, дәртле Ғайфулла ағай ҡурай уйнап үтә ине. "Ҡалай тыныс әле ауылда," - тип уйлап та өлгөрмәнем, бер инәй менән олатай күренде. Олатай алдан, инәй арттан бара. "Ғәлиәхмәт, тукта, һуңғы тапҡыр әйтәм, Ельцинды һайлайһың! Өйгә ҡайтырыңды, балаларҙы уйла. Мәтри, Ельцинды һайлайһың!" - тип һөйләнгән була инәй. Олатай кәпәсен батырыбыраҡ кейеп, өндәшмәй генә атлай бирә. Ошонан һуң, халыҡ һайлауҙарға битараф, тип әйтеп ҡара инде!

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

*ЙӨНДОҘЛОҒОҢ НИНДӘЙ...*

## ӘЛЛӘ ЫШАНЫУҘАН, ӘЛЛӘ...

Мин йондоҙнамәгә ышанам һәм һәр ваҡыт уның тура килеүен күҙәтәм. Юлбарыҫтар кеүек, мин дә түҙемле, һаҡмын һәм шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер хәл иткес мәлдәрҙә ҡыйыу аҙым эшләргә лә әҙермен. Беҙҙең эштә тап шул тәүәккәллек кәрәк тә инде.

1998 йыл - Юлбарыҫ йылы минең өсөн шул тиклем уңышлы йыл булғайны. Был ышаныуҙанмы, әллә үҙе шулай тура киләме икән, белмәйем. Моғайын да, был минең йылым, мин был йылда уңышҡа өлгәшергә тейешмен, тип тәғәйен маҡсат ҡуйыуға ла бәйлелер ул. Яңы тыуасаҡ йылда тормошҡа ашырыу ниәте менән күңелемдә генә йөрөткән йәшерен өмөт-хыялдарым да бар. Был йыл минә яңы ролдәр, яңы ҡаҙаныштар килтерер, тип көтөп ҡалам.

***Гүзәл МАЛИКОВА,***
***Башҡортостандың атҡаҙанған артисы.***

ИҪКӘРТЕҮ ҘӘ БАР...

## МАЙЛЫ ИТКӘ ШАРАП ҠУШҺАҢ...

**Өйрәк һәм ҡаҙ ите кеүек майлы ризыҡтарҙы һыуыҡ шампан шарабы менән бергә ҡулланғанда панкреатит сирлеләргә бик ауырға тура килеүе бар.**

Йәғни шампан шарабы ашҡаҙан аҫты биҙенең киҫкен ялҡынһыныуы барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә. Кешеләр йыш ҡына ашҡаҙан тирәһендә барлыҡҡа килгән ауыртыуҙы нервыларға йәки гастритҡа япһара ла ҡуя. Ундайҙар Яңы йыл төнөндә операция өҫтәленә барып ятыу ихтималлығы тураһында уйлап та ҡарамай. Врачтар ҡотҡарып ҡалһа ярай ҙа...

Икенсе диагноз - холецистит. Майлы аҙыҡ үттең күпләп бүленеп сығыуына булышлыҡ итә. Был үт ҡыуығындағы таштарҙың "күсенеүенә", шуның һөҙөмтәһендә өйәнәккә килтерә. Яңы йыл төнөндә холецистит йәки панкреатит өйәнәге менән дауаханаға эләгеүселәр һаны башҡа көндәргә ҡарағанда биш тапҡырға күберәк була. Врачтар Яңы йылда аҙыҡты һаҡ ҡулланырға кәңәш итә.

## ЙОМОРТҠАНЫҢ ДА ХӘҮЕФЕ БАР

**Байрамдан һуңғы көндәрҙә ҡайһы бер урындарҙа инфекцион дауаханаларға эләгеүселәр һаны ике тапҡырға арта. Диагноз - аҙыҡ менән ағыуланыу һәм ботулизм. Тап Яңы йыл төнөндә ҡайһы ваҡыт үлемгә килтергән өй шарттарында әҙерләнгән тоҙланған йәшелсә банкалары асыла.**

Кешенең сәләмәтлеге өсөн тағы ла бер ҡурҡыныс дошман - ул сальмонеллез. Врачтар сей йомортҡа ағынан эшләнгән кремдарҙы ҡулланыуҙы тыя. Хатта ҡыҙҙырылған йомортҡала ла сальмонеллез йәшәүен дауам итеп, ашҡаҙан-эсәк трактына эләгергә мөмкин. Врачтар ҡыҙҙырылған йомортҡа урынына һыуҙа бешерелгәнде ҡулланырға ҡуша. Күптәр байрамдан һуң магазинға барырға ялҡауланып, һауыҡтарын уйламайынса, оҙайлы ваҡыт һаҡланған ризыҡты ҡулланыу арҡаһында төрлө сирҙәргә дусар була ла инде.

## ЭСҺӘҢ ШАРАП, БУЛЫРҺЫҢ ХАРАП

**Яңы йылдан һуң бөтә донъяла оҙайлы булмаһа ла, бик ҡаты сир тарала. Ул сирҙең исеме - бахмур.**

Спиртлы эсемлектәр араһында хәүефһеҙерәге - араҡы, джин һәм аҡ шарап. Коньяк, виски һәм ҡыҙыл шарап - иң ҡурҡынысы, уларға ҡушылған матдәләр ағыуланыуға, күңел болғаныуға һәм баш ауыртыуына килтерә.

Әгәр ҙә эскән кешене бахмурҙан һауыҡтырып алырға уйлаһағыҙ, халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итергә мөмкин. Тоҙланған кәбеҫтә һәм ҡыяр һыуы, уның артынса бер сынаяҡ эҫе һурпа эсергә кәңәш ителә. Нашатыр еҫкәтергә йәки 5-6 тамсыһын бер стакан һыуыҡ һыу менән болғатып эсергә, уның артынса ҡаты сәй йәки ҡәһүә эсергә кәрәк. Саф һауала йөрөү алкоголде организмдан тиҙерәк сығарырға ярҙам итәсәк.

ЫҒЫ-ЗЫҒЫ



# ҺАУ БУЛ, ҺЫЙЫРҠАЙ,

## һаумы, Барыҫ!

**Төплө, эшһөйәр һәм аҡыллы Һыйыр эстафетаны хакимлыҡ итергә яратыусы Барыҫҡа тапшырырға йыйына. Ул туплап өлгөргән хазиналарҙы тағы ла арттырырға, өлгәшелмәгән үрҙәргә артылырға, мажараларға бирелергә әҙер булған һәм, ғөмүмән, көтөлмәгәнлектәргә тулы тормош вәғәҙә итеүсе Барыҫтың күңелен күреү өсөн Яңы йыл кисендә ниҙәр эшләргә, ниндәй ҡағиҙәләргә таянырға - шул хаҡта гәзит уҡыусыға бер нисә кәңәш тәҡдим итәбеҙ.**

**Был йыртҡысты нисек миһырбанлыраҡ итергә?** Байрамға әҙерләнгәндә ул оҙаҡ иҫтә ҡалырлыҡ сағыу тәьҫораттарға бай булһын өсөн көс тупларға, ә уның өсөн иң тәүҙә һәйбәтләп ял итергә кәңәш бирелә.

Яңы йыл кисәһенә күп итеп кеше саҡырыу мотлаҡ түгел, ә иң һәйбәте, уны яратҡан кешең, яҡындарың менән ҡаршыларға тырышығыҙ. Һөйгәнегеҙ менән икәү генә романтик кисә үткәрһәгеҙ, ҡаршылаған йылығыҙ айырыуса матур, тотошлайы менән баллы айға тиң буласаҡ. Был шулай уҡ күптән түгел ҡауышҡан парҙарға ла, оҙаҡ йылдар бергә йәшәүсе ир менән ҡатынға ла берҙәй үк ҡағыла. Тәүгеләр өсөн был кисә тулҡынландырғыс шатлыҡ сығанағы булһа, стажлы парҙар иһә хис-тойғоларын яңыртып аласаҡ. Тик былдай аулаҡ кисәне лә ысын байрамға әүерелдереү өсөн матур һәм бай өҫтәл әҙерләргә, бер-береңде ҡиммәтле бүләктәр менән шатландырырға кәрәк, музыка, бейеү хаҡында ла онотмағыҙ.

**Йәшәгән йортоғоҙҙо байрамға әҙерләү буйынса ла бер нисә кәңәшкә ҡолаҡ һалығыҙ.** Был юлы шыршының урыны - бүлмәләге төньяҡ-көнсығыш мөйөштә булыр. Шыршы мотлаҡ ылыҫ еҫе аңҡып торған ысын ағас булһын, уны төрлө-төрлө, матур, ҡиммәтле уйынсыҡтар менән биҙәгеҙ, сөнки Барыҫ байлыҡ, матурлыҡ, муллыҡ билдәһе, уға баҫалҡылыҡ төҫ түгел. Шыршыны биҙәгәндә һары, аҡ, алтын һәм көмөш төҫтәге быяла шарҙар төп урынды алып торһон. Байрам кисе буйы өйөгөҙҙә матур музыка уйнап торһон, тик ул тыныс һәм моңло көй булһын, Барыҫ көслө ритмдарҙы яратмай.

**Шыршы мәсәләһен хәл иттек, ә бына үҙегеҙгә нисек биҙәнеп, төҙәнергә?** Шуны онотмағыҙ: Барыҫтың еҫ һиҙгерлеге бик нескә. Шуға күрә иң тәүҙә парфюм мәсьәләһен уйлағыҙ. Ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа нәзәкәтле хушбуйҙарға өҫтөнлөк бирһен. Кейемегеҙ традицион байрам күлдәге, классик костюмдан тороуы ихтимал, ләкин уларға романтик деталдәр, ҡиммәтле биҙәүестәр өҫтәргә онотмағыҙ. Төҫтәргә килгәндә, аҡ-ҡара гамма, алтын һәм көмөш төҫтәр өҫтөнлөк итер, шул уҡ ваҡытта күк һәм зәңгәр төҫтәр ҙә хуплауға лайыҡ булыр. Ҡатын-ҡыҙҙар биҙәүестәре араһынан мунсаҡтарҙы һайлаһын ине: Барыҫ бит түңәрәк формалағы әйберҙәр ярата. Был хәҡиҡәтте өйөгөҙҙө биҙәгәндә лә онотмаһағыҙ ине: төрлө ҙурлыҡтағы һәм тәғәйенләнештәге шарҙар, түңәрәк предметтар күберәк булһын.

**Барыҫты ниндәй ризыҡ һәм аш-һыу менән ҡаршыларға?**

Был йәһәттән япон һәм ҡытай кухняһынан ҡайһы бер нәмәләрҙе үҙләштерергә кәңәш итер инек. Әлбиттә, шартына килтереп улар ризығын әҙерләп булмаған хәлдә лә байрам өҫтәлендә дөгөнән әҙерләнгән аш-һыу урын алһын, мәҫәлән, былау, ризотто йә булмаһа дөгөлө салаттар. Ни хәл итәһең, Барыҫ шуны ярата. Ит һәм диңгеҙ ризыҡтары ла урынлы булыр, тик уларҙы өҫтәлгә ҡайнар килеш килтерегеҙ. Ә бына ҡойҡа ҡойоп әҙерләнгән аш-һыу (холодец, заливное) һәм боҙ һалынған эсемлектәр тәҡдим ителмәй. Башҡа төр эсемлектәр һәм емеш-еләктән өҫтәлегеҙ һығылып торһон.

Әгәр һеҙ Яңы йыл кисен ресторанда йә ҡунаҡта түгел, ә өйөгөҙҙә ҡаршыларға йыйынһағыҙ, аш-һыуға ныҡ иғтибар бирегеҙ, бөтә ризыҡты ла үҙ ҡулдарығыҙ һәм ихлас күңелегеҙ менән әҙерләгеҙ. Йортоғоҙҙан ылыҫ ағасы һәм мул аш-һыу еҫтәре аңҡып торһон - шул саҡ Барыҫ һеҙҙең тырышлыҡты тейешенсә баһалар һәм үҙ йылында маҡсаттарығыҙға өлгәшергә булышлыҡ итер.



ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!



**Беҙҙең "Пышка" компанияһы Башҡортостандан ситтә үткән төрлө күргәҙмә, ауыл хужалығы аҙналыҡтарында ҡатнашып тора. Бындай сәфәрҙәр барышында үҙенсәлекле милли ризыҡтарыбыҙҙы бүтәндәргә танытып ҡына ҡалмайбыҙ, "Башҡорт кухняһы" тигән данды, заманса әйткәндә, брендты донъя баҙарында раҫлайбыҙ. Американдар ошондай осрашыуҙарҙың береһендә "Американы "Макдоналдс"һыҙ күҙ алдына килтереп булмаған кеүек, Башҡортостанды ла "Пышка"һыҙ күҙ алдына килтереүе мөмкин түгел," - тип әйтеп ҡуйғайны.**

# ТӘМЛӘП ҠАРАУ ӨСӨН ТҮГЕЛ,

## һәр көн туҡланыу өсөн беҙҙең ризыҡ

Күптән түгел Мәскәү ҡалаһында үткән "Алын көҙ" ауыл хужалығы күргәҙмәһендә Италия, Бөйөк Британия, Сербиянан килгән ҡунаҡтар беҙҙең милли ризыҡтарыбыҙҙы ауыҙ итеп, һуштары китте. Бигерәк тә ҡаҡланған ҡаҙҙы, ҡаҙылыҡты, һалма ҡушып бешерелгән билмәндәрҙе, тары ярмаһынан әҙерләнгән табикмәктәрҙе яратып ашанылар. Балан ҡатығын тәмләп, телдәрен йота яҙҙылар. Сербтар хатта беҙҙең "бишбармаҡ", "өлөш"-тәрҙе күреп, бында бит беренсе һәм икенсе аш бергә бирелгән, тип әйтеп ҡуйҙы. Тағы ла төрлө үләндәрҙән әҙерләнгән сәйҙәрҙең үҙенсәлекле хуш еҫ һәм тәм менән айырылып тороуына иғтибар иттеләр. Ҡоротто аш тәмләткес булараҡ ҡына түгел, шифалы аҙыҡ булараҡ та юғары баһаланылар. Бигерәк тә башҡорт милли ризығы булараҡ танылыу алған ҡыҙыл эремсегебеҙ ят аш булараҡ танһыҡ. Мәскәүҙәр унан эшләнгән гөбәҙиәне, ваҡ бәлеште, ҙур бәлештәрҙе ярата. Ә ҡыҙыл эремсек менән бешерелгән алмалар улар өсөн деликатес һанала. Ғөмүмән, мәскәүҙәр үҙҙәрендә асылған "Пышка" кафеһы өсөн сикһеҙ рәхмәтле.

Беҙ күп осраҡта үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе баһалай, борон-борондан килгән рухи һәм матди хазиналарыбыҙҙы бүтәндәргә күрһәтә, һата белмәйбеҙ шул. Әгәр бөгөн Мәскәүҙә милләттәштәребеҙ ҙә, бүтән халыҡ вәкилдәре лә беҙҙең кафенан өҙөлмәй, беҙ әҙерләгән ризыҡты танһыҡ күреп, яратып ашай һәм унда үҙҙәрен Башҡортостанда ултырғандай хис итә икән, тимәк, был эште тағы ла киңерәк йәйелдерергә кәрәк. Юғиһә, беҙ үҙебеҙҙең тәмле һәм туҡлыҡлы милли ризыҡтарыбыҙ була тороп, әллә ҡайҙан килтерелгән ҡытай, итальян, төрөк һәм башҡа сит милләт кухняларына өҫтөнлөк бирәбеҙ. Улар бит беҙҙең организм өсөн ят әйбер, аш төрләр өсөн генә, ә беҙҙең аш-һыу көндәлек туҡланыуға тәғәйенләнгән. Бөгөн магазин кәштәләрен ярым фабрикаттар, тәм биреүсе аҙыҡ өҫтәмәләре ҡушып әҙерләнгән сифатһыҙ аҙыҡ-түлек тултырған заманда, беҙҙең ризыҡтар тәбиғи яҡтан таҙа, саф ризыҡ булараҡ баһалана. Тап ана шуға ла "Пышка" брендын франшиза буйынса күпләп һорайҙар. Яңыраҡ Тобольск, Тамбов, Новосибирскиҙан килеп, беҙҙең ашһыу һәм уны әҙерләү технологиялары менән танышып ҡайттылар. Беҙ уларға был аш-һыу төрҙәре борондан килгән рецепттар буйынса, тик заманса ҡоролмаларҙа һәм яңы технология буйынса әҙерләнеүен аңлаттыҡ. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла аҙыҡты исраф итмәгән. Тап шул бөтмөрлөгө, һаҡсыллығы менән ул ҡаҙҙы ҡаҡлап, ҡоротто киптереп, майҙы ҡайнатып һаҡлаған, ҡаҡ ҡойған. Ҡаҙылыҡ, тултырма тултырған, эсәк-ҡарынын да әрәм итмәгән. Башҡорттар һәр аҙыҡты белеп ҡулланған, шуға ла улар ныҡ булған, ауырымаған. Әйтәйек, һимеҙ ҡаҙылыҡ ашағандан һуң ҡоротло һурпа эскәс, уларҙы ашҡаҙан сире борсомаған.

Ҡәҙерле дуҫтар, һеҙҙе Яңы йыл байрамы менән ҡотлап, үҙебеҙҙең башҡорт кухняһында әҙерләнгән аш-һыу төрҙәрен тәҡдим итәбеҙ. Табынығыҙ мул, ашығыҙ тәмле булһын!

**Рита АБДРАХМАНОВА, "Пышка" компанияһының генераль директор урынбаҫары.**

### Ҡыҙҙырылған ҡаҙ

Ҡаҙ түшкәһен орлоҡтарынан таҙартылған алма, ҡара емеш менән тултырабыҙ һәм лимон һуты өҫтәйбеҙ. Унан һуң ҡаҙҙың тышын гәрсис (горчица) менән һылайбыҙ ҙа фольгаябып, эҫе мейестә ике сәғәт тирәһе бешереп алабыҙ. Ҡаҙҙы табынға ҡуйыр алдынан йәшел тәмләткестәр һәм лимон менән биҙәйбеҙ.

**Бының өсөн: бер ҡаҙ, 500 г алма, 200 г ҡара емеш, 20 г лимон һуты, 5 г гәрсис, тоҙ кәрәк.**

### "Башҡорт һылыуы" бәлеше

Бәлеш ҡамырын әҙерләү өсөн йомшартылған маргаринды шәкәр менән яҡшылап ыуырға. Уға йомортҡа, аш һеркәһендә һүндерелгән сода, тоҙ, ванилин ҡушып, артабан ыуырға. Унан һуң он һибеп, тиҙ генә ҡамыр баҫырға.

Әҙер ҡамырҙан 5 мм ҡалынлығындағы йәймә йәйеп, табаға һалып, мейестә 15 минут тирәһе бешереп алырға. Бәлеш өсөн йәймә һыуынғас, уның төбөнә конфитюр түшәргә һәм эремсек һалырға. Бәлештең өҫтөн ҡара емеш, күрәгә, грек һәм миндаль сәтләүектәре менән биҙәп, желе ҡойора. Тирә яғына миндалдән эшләнгән япраҡтар һалып сығырға.

**Ҡамыр өсөн: 600 г он, 200 г шәкәр ҡомо, 300 г маргарин, 2 йомортҡа, 20 г сода, 5 г аш һеркәһе, 2 г тоҙ, 1 г ванилин кәрәк.**

**Эслек өсөн: 70 г конфитюр, 200 г эремсек, 70 г миндаль сәтләүеге, 30 г грек сәтләүеге, 70 г ҡара емеш, 70 г күрәгә, 200 г желе кәрәк.**

### "Хан ашы" салаты

Бешкән итте һәм ҡара емеште һалам кеүек итеп турарға. Бешкән йәшелсәләрҙе ҡырғыс аша үткәрергә. Сәтләүекте ваҡларға, һуғанды ярты ҡулса кеүек турап, аш һеркәһендә тотоп алырға.

Әҙер компоненттарҙы түбәндәгесә итеп һалып сығырға: иң тәүҙә кишер, шунан ит, өҫтөнә майонез һылайбыҙ, артабан маринадланған һуған, шунан ҡара емеш, сөгөлдөр һәм тағы ла майонез һылайбыҙ. Салат өҫтөнә грек сәтләүеге һибеп сығабыҙ һәм йәшел тәмләткестәр менән биҙәйбеҙ.

**100 г салат әҙерләү өсөн: 20 г һыйыр ите, 10 г ҡара емеш, 15 г кишер, 15 г сөгөлдөр, 25 г майонез, 10 г грек сәтләүеге, 8 г башлы һуған, 2 г аш һеркәһе, 1 г әнис, петрушка алына.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Икеләнеүле һәм хәүефле уй уйлама

Йәйге бер кистә бер кеше тирә-яғын урман менән уратып алған өйөнөң артҡы яҡтағы ихатаһына сығып ултырған. Бер аҙ киске тәбиғәт менән аралашып, ҡәнәғәтлек кисермәксе булған ул. Ҡараңғы төшкәс, ҡапыл ғына ел көсәйеп китеп, ағастар шаулай башлауын шәйләп ҡалған. Тиҙҙән уны, һауа торошо боҙолоп китмәҫме, тигән шомло уй солғап алып, борсоуға һалған. Бына ул урман төпкөлөнән ниндәйҙер ҡурҡыныс тауыштар ишеткән һымаҡ булған, унан һөжүм итеүсе ҡырағай хайуандар килеп сығыуын күҙ алдына килтергән. Кешенең аңы тулыһынса кире уйҙар әсирлегенә бирелгән. Ни тиклем ҡурҡыныс һәм шикле уйҙарға сумған һайын, шул тиклем тәүмаҡсатынан - тыныс йәйге кистән ләззәт алыу ниәтенән йыраҡлашҡан. Был ваҡиға Брайан Адамс тарафынан әйтелгән тормош ҡанунын тасиурлай: "Икеләнеүле һәм хәүефле уйҙар уңышһыҙлыҡҡа килтерә".

Уңышһыҙлыҡты теге йәки был хәл-ваҡиғаға ҡарап, төрлө кеше төрлөсә билдәләй, әммә был аңлатма ниндәй генә булмаһын, "уңышһыҙлыҡ" төшөнсәһе һәр ваҡыт ниндәйҙер алдан билдәләнгән маҡсатҡа йәки ынтылыш объектына өлгәшә алмауҙы үҙ эсенә ала. Икеләнеү һәм хәүеф маҡсатҡа өлгәшә алмауҙа ҙур роль уйнай. Уларҙы аңыңа индереүгә юл ҡуйыла икән, был ике кире көс тиҙ генә кешенең ҡыуаныстарын, йәки ваҡытлыса ауырлыҡтарҙы еңергә ярҙам итеүсе эштең ыңғай һөҙөмтәһен күреү һәләтен томалай.

Мәҫәлән, интеллектуаль йәки физик арыу, эмоциональ көйһөҙлөк кисергән йәки насар туҡланған студент был ике кире тойғоға ышаныслы ышыҡ булдыра ала. Әгәр был шулай икән, һаҡлан! Һәр көйәләнеү яңы икеләнеүҙәр алып киләсәк, ә был икеләнеү үҙенә иптәшкә ҡурҡыу тойғоһон саҡырасаҡ. Тиҙҙән студент көсөргәнеш һәм хәүеф кисереп, имтихан алдынан ятлаған материалын иҫендә ҡалдырасағына икеләнә башлаясаҡ. Ә үҙ көсөнә шикләнгән студент имтиханды тапшыра алмауы ла ихтимал. Үҙ-үҙеңә ышанмауҙан тыуған көсөргәнеш тойғоһо иҫтә ҡалырға тейешле мәғлүмәтте хәтерҙән юйып ташлай.

Теләһә ҡайһы осраҡта ла уңышһыҙлыҡтан ҡасып ҡотолоу өсөн беҙҙең уйҙар ыңғай тойғоларға йүнәлдерелергә тейеш. Спортта чемпиондар тап ошондай ыңғай фекерләү көсөн ҡуллана. Уйындың уңышлы тамамланасағына ышаныу уңыштан башҡа һөҙөмтә тураһында уйларға урын да ҡалдырмай. Спортсының уңышлы сығыш яһауына еңеүгә ышаныу белдергән көйәрмәндәр ҙә ярҙам итә ала. Профессиональ гольфта уйын яланы тирәләй уратып алған тамашасының йыш ҡына тын ҡалып, иғтибар менән уйынды күҙәтеүе генә лә уйынсыға уңыш ҡаҙанырға ярҙам итә.

Уйҙар - ул каналдар, ә ыңғай уйҙар - асыҡ каналдар. Беҙҙең уйҙар шик һәм хәүеф менән солғана икән, йыш ҡына бының артынан уңышһыҙлыҡ һәм еңелеү килә. Был каналдар ыңғай уйҙар һәм өмөттәр менән яҡшы нығытылғанда ғына, кире уйҙар унда үтеп инә алмай.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 28 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Криминальные хроники"
18.50 "Жди меня"
19.40 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 31-я серия. Мелодраматический сериал
21.00 Время
21.30 "Дом на Озерной", 5-я серия
22.30 "Волна всемирного потопа". Док. фильм
23.30 "Нечто". Ужасы
01.10 Биатлон. Рождественская гонка. Трансляция из Германии
02.40 "Толстушки". Комедия
04.10 "Детективы"

### "РОССИЯ"
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Наша Феличита"
10.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Две стороны одной Анны"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Семнадцать мгновений весны". Военная драма
15.50 "Суд идет"
16.50 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
17.50 "Вести. Дежурная часть"
18.00 "Однажды будет любовь". Сериал
19.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты", 13-я и 14-я серии. Сериал
23.00 "Мой серебряный шар"
00.00 "Вести+"
00.20 "Волшебная сила". Комедия
01.45 "Звезда Шерифа". Детектив
04.05 "Комната смеха"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.45 "Просто вкусно"
09.00 "Квартирный вопрос"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.20 "Чистосердечное признание"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00 "Сегодня
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Литейный". Остросюжетный сериал
23.35 "Коллекция глупостей Максима Кононенко"
00.40 "QUATTRORUOTE"
01.10 "Сумеречная зона"
03.05 "Мой ласковый и нежный май"
04.10 "Пересечение 10-й и Вульф"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Полезные новости"**
**10.10 Сериал**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.30 "Замандаш"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Хрустальный соловей представляет". "Музыкальная шкатулка"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 Мультфильм**
**17.00 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**17.30 "Победить себя"**
**17.55 "Любимые мелодии"**
**18.25 "Искусство быть оратором"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Наш мир"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "В центре внимания"**
**21.05 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 29 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.00 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Криминальные хроники"
18.50 "След". Сериал
19.40 "Пусть говорят"
20.20 "Спальный район", 32-я серия
21.00 "Время"
21.30 "Дом на Озерной", 6-я, закл. серия
22.30 "Среда обитания. Праздник живота". Док. фильм
23.40 "Мужчина по вызову". Комедия
01.20 "С девяти до пяти"
03.00 "Взлет и падение Хайди Фляйсс"
04.20 "Детективы"

### "РОССИЯ"
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Улицы разбитых фонарей"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.45 "Две стороны одной Анны". Сериал
13.40, 16.50, 17.50 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Семнадцать мгновений весны". Военная драма
15.50 "Суд идет"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
18.00 "Однажды будет любовь". Сериал
19.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сваты", 15-я и 16-я, закл. серии
23.00 "Ландыши для королевы. Гелена Великанова"
00.00 "Вести+"
00.20 "Крупногабаритные". Комедия
02.05 "Черное рождество"
03.50 "Горячая десятка"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
09.00 "Кулинарный поединок"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.15 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Литейный". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Очная ставка"
00.25 "Главная дорога"
01.00 "С широко закрытыми глазами". Драма
04.05 "Любовь и сигареты". Мелодрама

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 Мультфильм**
**10.00 "Автограф". З. Атнабаева**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Мультфильм**
**15.30 "Куласа"**
**15.45 Мультфильм**
**16.15 "Знакомые незнакомцы"**
**17.40 "Формула успеха"**
**18.15 "Сэнгелдэк"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.35 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 30 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.10 "Гусарская баллада". Комедия
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Детективы"
16.50 "Давай поженимся!"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Пусть говорят"
19.40 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Тариф новогодний". Романтическая комедия
23.10 "Человек-паук-2". Приключения
01.30 "На рыбалку!" Комедия
03.00 "Принцесса льда"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ее ледовое Величество. Елена Чайковская"
10.00 "Улицы разбитых фонарей"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Святое" дело". Комедия
14.50 "Лучшие годы нашей жизни"
16.50 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести-Башкортостан"
17.50 "Вести. Дежурная часть"
18.00 "Однажды будет любовь". Сериал
19.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Мой". Мелодрама
00.50 "Зигзаг удачи". Комедия
02.35 "Игра на миллионы". Комедия
04.30 "Веселые ребята". Музыкальный фильм

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
09.00 "Дачный ответ"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.20 "Особо опасен!"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
19.30 "Литейный". Остросюжетный сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "И снова здравствуйте!"
00.20 "Авиаторы"
00.55 "Универсальный агент". Боевик
02.45 "Гром в штанах". Комедия
04.20 "Завал"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 Мультфильм**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.40 "Родной язык"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.25 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Знакомые незнакомцы-2"**
**17.05 Мультфильм**
**17.55 "Искусство быть оратором"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Связующая нить Времен…"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Я в ладонях снежинки несу". Концерт**
**23.30 Чемпионат России по волейболу среди мужских команд. "Урал" (Уфа) - "Динамо" (Москва). По окончании: погода**

## 31 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.10 "Карнавальная ночь-2, или 50 лет спустя". Комедия
12.00 Новости
12.10 "Ледниковый период: глобальное потепление". Полнометражный мультипликационный фильм
13.30 "Две звезды". Новогодний выпуск
16.10 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия
